✓ *Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! 18 октябргә тиклем "Киске Өфө" гәзитенә лә ташламалы хаҡҡа - 50665 индексын билдәләп, 375 һум 60 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ә һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары, инвалидтар өсөн (танытмаларын күрһәтеп) ташламалы хаҡ 348 һум 48 тин тәшкил итә. Почта бүлексәләренә ашығығыҙ!*

РЕСПУБЛИКА КӨНӨ МЕНӘН!

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№41 (563)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Киләсәк беҙҙән башлана!




5

### Авторы билдәһеҙ ҡулъяҙма

Өфөлә иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була



7

### Донъя кимәлендәге уҡыу йорто...



8-9 оло маҡсаттар менән генә йәшәй ала

### Йөҙ кәлимә фекерҙәр...

йәғни 2 минут та 24 секундта тыуған уйҙар



11,16

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Республика байрамын билдәләгән был көндәрҙә милләтебеҙ яҙмышын, Башҡортостаныбыҙҙың артабанғы үҫеш юлдарын нисегерәк күҙаллайһығыҙ?

***Мансур ӘЙЮПОВ, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы вице-президенты:*** Суверенитет иҡтисади һәм сәйәси үҙаллылыҡ шарттарында республикаға, унын халҡына, башҡорт халҡына ҙур бер баҫҡысҡа күтәрелергә мөмкинлек бирҙе. Башҡорт милләтенә унын тарихы, меңәрләгән батыр улдары әйләнеп ҡайтты, милли теле, мәҙәниәте, сәнғәте үҫеште һәм быларҙы башҡорт милләте бер ҡасан да онотмаясаҡ һәм бынан һуң бер ваҡытта ла ошо һуңғы егерме йыл йәшәгәндән түбән кимәлдә йәшәргә риза булмаясаҡ. Милләттең тарихи хәтере уяныуының төп әһәмиәте бына ошонда.

Дәүләт суверенитеты иғлан иткәс, беҙ ике референдум үткәрҙек. Унын һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһынын иҡтисади үҙаллылығы һәм Рәсәй Федерацияһы менән килешеү мөнәсәбәте өсөн республиканың 75 процент халҡы ыңғай тауыш бирҙе.

Бөгөн беҙ юл сатында. Ысынлап та, милләт артабан ни эшләргә тейеш? Һуңғы егерме йыл тик башҡорттар файҙаһына ғына булды, тип яңылыш уйлаусылар ҙа бар. Был йылдар эсендә республикабыҙҙа йәшәгән бар милләттәр татыу йәшәне. Миңә Раил Кузеевтың милләткә ҡарашы оҡшай. Ғалим милләтте бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүсе күренеш тип атай. Был процесс өс факторға бәйле: тәбиғи-тарихи, социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси факторҙар. Төрлө тарихи осорҙа төрлө факторҙар үҫеш процесын, унын йүнәлешен билдәләй, әммә был процесты туҡтатыу мөмкин түгел. Уны башҡалар туҡтата һәм емерә алмай, тик милләт үҙе генә быны эшләй ала.

Бөгөн туған телде һаҡлау проблемаһы бик киҫкен тора. Беҙ һаман да, туған телебеҙҙе дәүләт һаҡларға тейеш, тип ҡарайбыҙ. Минеңсә, туған телде иң беренсе нәүбәттә милләт үҙе һаҡларға бурыслы. Әгәр ҙә башҡорт балаһы үҙенең туған телен өйрәнмәй икән, ғаилә был эштән ситтә икән, дәүләт ярҙамы менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап булмаясаҡ.

Тағы бер мөһим мәсьәлә. Киләсәккә милләт фәҡәт үҙгәрештәр аша ғына үҫә аласаҡ. Беҙ күп осраҡта үҙгәреште бик ябайлаштырабыҙ. Башҡорт кешеһе Австралиялағы, Америкалағы башҡорттар менән Интернет аша бәйләнеш алып бара ала икән, был хәҙерге быуат өсөн күрһәткес була ала...

***Иршат АҪЫЛҒУЖИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты советы ағзаһы, "Бизнес-үҙәк"етәксеһе:*** Элек башҡорттоң яугир, шағир образын алға һөрөү булһа, беҙ XX1 быуатта унын яңы имиджын да тыуҙырырға тейешбеҙ.Ысынлап та, XX1 быуат башҡорто нисегерәк булырға тейеш һуң? Ул һөҙөмтәле менеджер, ҡулынан килмәгән эше булмаған шәхес. Совет осорона тиклем башҡорт ерен ҡуртымға биреп йәшәгән. Беҙ ҡайһы саҡ тарихҡа һылтанып, тарихи ауырыу менән ауырып китәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Думаһы биргән Законды файҙаланып, аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы кире ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын күрергә теләмәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, Ер кодексы беҙгә киренән аҫаба булырға мөмкинлек бирә бит. Әлегә ерен 10 гектар ғына икән, ти. Һөҙөмтәле эшләп, башҡаларҙың ерен ҡуртымға алып, еренде киңәйтә алаһың. Беҙ әллә ниндәй ҙур байлыҡтарға эйә була алмаһаҡ та, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙә тормошобоҙҙо матур итеп ҡора алһаҡ, балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә тыуған еребеҙҙе, республикабыҙҙы, эшебеҙҙе ҡалдыра алырбыҙ, тип уйлайым. Тик шул сағында беҙҙе кеше булараҡ та, халыҡ булараҡ та ихтирам итерҙәр. Яңыраҡ бер егет менән бәхәсләшеп киттек. Ул сәйәсәт менән яна. Мин уға сәйәсәт менән артыҡ шөғөлләнмәйенсә, үҙебеҙҙең тормошто алып барырға кәңәш иттем. Үҙебеҙҙең тамаҡты үҙебеҙ туйҙырһаҡ, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең рухта тәрбиәләһәк, уларға белем бирһәк, бер ниндәй ҙә сәйәсәт беҙгә ҡурҡыныс түгел. Ғаиләлә балалар ишле булырға, бер ата урынына кәмендә өс ул килеп баҫырға, унын эштәрен дауам иттерергә тейеш. Беҙгә, ғөмүмән, бер ниндәй ҙә дауылға бирешмәҫлек милли ҡоролош хаҡында уйланырға кәрәк. Ул ҡоролошта иҡтисад төп нигеҙҙе тәшкил итһен.

**Дауамы 2-се биттә.**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




### БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА

*Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,*
*Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,*
*Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,*
*Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:*
*- Башҡортостан бында башлана!*
*Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,*
*Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,*
*Талпына ла күңелем күктә тулай,*
*Яҙ айында һабан турғайындай:*
*- Башҡортостан бында башлана!*
*Башҡортостан мине ҡаршы ала,*
*Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап,*
*Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,*
*Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.*
*- Республикам, бына башландың! - тип,*
*Әйткәнемдә ергә ҡапланып,*
*Ишетәмен ерем ҡуйынынан*
*Сабыр ғына тауыш аҡҡанын:*
*- Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,*
*Юшатырҙан Әйгә ҡәҙәрле*
*Йәйрәп ятҡан ерҙең күңеленә*
*Һәр ҡарышы,*
*Һәр ҡарашы, беләм, ҡәҙерле.*
*Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә,*
*Берсә көләп, берсә уйланып.*

*Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,*
*Башланам бит һинән, уланым.*
*Мин бит башланамын һинән, унан,*
*Кешеләрем, һеҙҙән башланам!*
*Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,*
*Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай...*
*Ә мин мәңге бында - Уралымда,*
*Тик булмышым инде өр-яңы:*
*Минең янға донъя килмәһә лә,*
*Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.*
*Моң-шатлығын илдең тигеҙ күреп,*
*Ил алдында һүҙен тиң әйтеп,*
*Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,*
*Ҡоласымды минең киңәйтеп.*
*"Башҡортостан!" - тиеп, улдарыма*
*Алыҫ ҡитғаларҙа ҡарай ер.*
*Кешем намыҫында кер күрһәләр,*
*Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр.*
*Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!*
*Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.*
*Йөҙөгөҙ аҡ булһын,*
*Минең кеүек,*
*Минең кеүек - Башҡортостан кеүек,*
*Был донъяға тура ҡарарлыҡ.*

✓ *Ә инде халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуҡтарын танийбыҙ икән, милли республикаларҙың суверенлы дәүләтселеген тергеҙеү мотлаҡ. Был һыналған һәм килешеүҙәр нигеҙендә тыныс юл менән хәл ителә торған берҙән-бер юл.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ИМАН НУРЫ КИТМӘҺЕН!

**"Киске Өфө" - бик үҙенсәлекле гәзит. Мин уны алты айлыҡ сағынан уҡ беләм. Үкенескә күрә, гәзит донъя күреп, ярты йыл үткәс кенә алдыра башланым. Шуға тиклем ишетмәй, күрмәй, белмәй йөрөгәнмен. Шунан алып уны күңелем талап иткән иң яратҡан баҫмам, тип һанайым.**

Исеменән үк яҡын ул миңә. Башҡорттоң мәркәзе - Өфө, тигәндәй, бала саҡтан ошо ҡала тураһында хыялланып, "тау башында балҡыған" Өфөгә тартылып үҫтек. Унан күңел һандығында йәшлектең иң гүзәл мәлдәре булып һаҡланған шаулы студент йылдары... Төрлө яҡҡа таралып, хәҙер инде олоғайһаҡ та, Өфөгә тарта ла тора күңел. "Киске Өфө" иһә дәртле, сағыу хыяллы, сая саҡтарға ҡабаттан алып ҡайта. Уйланырға, тормош ығы-зығыһына батмаҫҡа саҡыра. Мөхәррир һүҙе булһынмы, Әхмәр Үтәбайҙың халыҡсан әйтеүе, йәки З. Әйленең сәмле уғы булһынмы - барыһы ла күңелгә яҡын. Ишек асып ингән йәш ҡәләмселәре лә хатта ҙур өмөттәр биреп ҡыуандыра.

Шуныһы ҡыҙыҡ: "Киске Өфө" бөтәһенә лә асылмай икән. Байҡай йөрөйөм: уны күңелендә осҡон йөрөткән рухлылар ярата. Барыһын да ҡағыҙға төшөрөп булмай, тип көрһөнмәгеҙ яратҡан баҫмабыҙҙы донъяға бар итеүселәр, беҙ һеҙҙең әйтергә теләгәнде мәҡәләләге юлдар араһынан да күреп уҡыйбыҙ. "Киске Өфө"нөң йөҙөнән шулай иман нуры китмәһен!

**Гөлсәриә ӘБИЛЕВА,**
**Сибай телевидениеһының баш мөхәррире.**

# МӘҒЛҮМӘТ КЕНӘ ТҮГЕЛ...
## рух та бирә

**"Киске Өфө" хаҡында беренсе ҡат ишеткәс, "Вечерняя Уфа" тигән русса гәзиттен күсермәһе, тип уйлай торғайным. Бер мәл, мин мәктәптә укыған саҡта әле, "Киске Өфө" редакцияһы вәкилдәре беҙҙең мәктәпкә килде. Барлыҡ балаларҙы йыйып, күңелле һәм мауыҡтырғыс сара ойоштторҙолар. Һәр журналист үҙе менән таныштырҙы, Әхмәр Үтәбай төрлө шигырҙарын һөйләп ишеттерҙе, баш мөхәррир Гөлфиә Янбаева гәзиттең йөкмәткеһе менән яҡындан таныштырып үтте. Шул осрашыу әле булһа яҡты иҫтәлек булып хәтеремдә уйылып ҡалған. Ошо осрашыуҙан һуң ауылыбыҙҙа "Киске Өфө"гә яҙылыусылар һаны артты.**

"Киске Өфө" бик уҡымлы, сәйәси, иҡтисади, мәҙәни, тарихи, бигерәк тә әхлаҡи темаларҙы милләтебеҙ көҙлегенән күтәреүсе заман баҫмаһы. Ундағы бөтә донъяға билдәле кешеләрҙең аҡыллы фекерҙәрен, төрлө хәл-ваҡиғаларға бай кеше яҙмыштарын сағылдырған мәҡәләләрҙе, хикәйәләрҙе уҡып, күпме фәһем алаһың. Мәктәп уҡытыусыларына, уҡыусыларына ла файҙалы ул. Тел, әҙәбиәт, тарих, дин, тормош һабаҡтары дәрестәрендә ҡулланырлыҡ материалдар күп. Гәзит үҙенең уҡыусыларына мәғлүмәт биреү менән бер рәттән, милли рух тәрбиәләүе менән дә ҡиммәт. Хәҙерге баҙар иҡтисады, рекламаға ҡойонған "һары матбуғат" араһында ошондай ҡабатланмаҫ матур башҡорт гәзите булыуы ҡыуаныслы күренеш.

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Республика байрамын билдәләгән был көндәрҙә милләтебеҙ яҙмышын, Башҡортостаныбыҙҙың артабанғы үҫеш юлдарын нисегерәк күҙаллайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, философия фәндәре докторы, профессор:*** Халыҡ, ил йәшәйешенең төрлө осорҙарында уның үҫешенә булышлыҡ итеүсе идеялар булырға тейеш. Әгәр халыҡты алға әйҙәүсе, йүнәлеш биреүсе, уға дәрт-дарман өҫтәүсе милли идея юҡ икән, уның хәрәкәте стихиялы, маҡсатһыҙ һәм буталсыҡ буласаҡ. Әгәр беҙ Рәсәйҙең прогрессив дәүләт булып ҡалыуын, уның составында йәшәгән һәр халыҡтың иркен һәм ирекле үҫешә алыуын теләйбеҙ икән, уның күп милләтле булыуына нигеҙләнеп эш итергә тейешбеҙ. Ил етәкселегенә бар халыҡтан бер милләт яһау маҡсатында милләттәрҙе ҡыҫырыҡлау, уларға баҫым яһау юлын һайларға түгел, ә уртаҡ Ватаныбыҙ берҙәм һәм көслө булһын өсөн һәр милләттең үҫеше, сәскә атыуы өсөн матди, сәйәси, мәҙәни һәм рухи шарттар булдырырға кәрәк, тип иҫәпләйем.

Беҙ ике тиҫтә йыл буйына суверенитет тураһында һөйләнек, ғәмәлдә ул яңынан идея кимәленә кире ҡайтты. Хәҙер был һүҙ ҡулланылыштан бөтөнләй төшөп ҡалды. Конституциябыҙҙан сығарып ташланғас, уның өсөн бер юридик нигеҙ ҙә ҡалманы. Был хәл асылда милләттәрҙең халыҡ-ара кимәлдә танылған үҙбилдәләнешкә хоҡуғын инҡар итеү ул. Был милли республикалар яҙмышына ғына түгел, Рәсәй киләсәгенә лә хәүеф тыуҙыра. Ә инде халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуҡтарын танийбыҙ икән, милли республикаларҙың суверенлы дәүләтселеген тергеҙеү мотлаҡ. Был һыналған һәм килешеүҙәр нигеҙендә тыныс юл менән хәл ителә торған берҙән-бер юл.

***Румил АҘНАБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Рәсәй халыҡтары үҙ ерҙәрендә меңәр йылдар буйы йәшәй, улар үҙ төйәгендә айырым милләт булараҡ формалашҡан. Киләсәктә лә беҙҙең халыҡтарыбыҙ үҙҙәренең тарихын оноторға теләмәйәсәк һәм айырым милләт булып йәшәүҙән ваз кисмәйәсәк. Ә милләтебеҙ киләсәге - йәштәр ҡулында, шуға күрә лә уларҙы илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү бурысын иң беренсел мәсьәләләрҙең беренһе тип ҡарайым мин. Йәштәрҙе нисек тәрбиәләргә, нисек итеп уларҙы заман афәттәренән йолоп ҡалырға, унан ары көнитмешебеҙҙе нисек ҡорорға, нисек итеп заман үҙгәрештәренә яраҡлашырға тигән уйҙар борсой беҙҙе. Ошо урында үҙебеҙҙең йолалар, традицияларға, халыҡ педагогикаһы алымдарына мөрәжәғәт итеүҙән дә яҡшырағы булмаҫ, тип, Ҡоролтай башланғысында аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр хәрәкәттәрен тергеҙергә ҡарар иттек. Күҙаллауыбыҙса, бындай ойошмалар һәр ауылда булдырылып, аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр бар тәрбиә мәсьәләләрен үҙ ҡулдарына алырға тейеш. Бөгөн ауылда йәштәрҙе һәм балаларҙы тәрбиәләү, ғаилә мөхитен сәләмәтләндереү буйынса эш етерлек. Ауылдарыбыҙҙа күҙәтелгән һуңғы ваҡиғалар, бигерәк тә ауылдарҙың үҙ көстәре менән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", Шәжәрә байрамдары ойоштороуы халҡыбыҙҙың яңы күтәрелеш этабына етеүен, уның рухиәте үҫеүен күрһәтте. Милләттәштәребеҙ үҙҙәре өсөн кемдеңдер килеп нимәлер эшләүен көтөп ятмай, инициативаны яйлап үҙ ҡулдарына ала бара. Был йәһәттән 131-се "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡты ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы Федераль закондың 27-се статьяһына ярашлы, урындарҙа Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (Территориальное общественное самоуправление - ТОС - ТЙҮ) ойоштороу үҙен аҡлай. Ер мәсьәләһен хәл итеү, шул иҫәптән көтөүлектәр, бесәнлектәр бүлеү, ауылға юл һалыу, шишмә, йылға буйҙарын тәртиптә тотоу, юл һалыу, ауылға ситтән килеүселәрҙе индереү-индермәү, кемгәлер өй һалырға рөхсәт биреү-бирмәү, мәктәптәрҙе яптырыу-яптырмау, шулай уҡ айыҡ тормош өсөн көрәш һ.б. - былар бөтәһе лә әлеге Үҙидаралыҡтарҙың вәкәләтендә буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, бөгөн ауылдарҙы бөтөрөүҙең аҫтыртын сәйәсәте алып барылғанда, уларҙы законға ярашлы, закон нигеҙендә һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы - ул ТИҮ ойоштороу. Бында тәү сиратта үҙенең ере, тәбиғәте, эсәр һыуы, зыяраттарҙа ятҡан ата-бабалары рухының тыныслығы өсөн битараф булмаған, башлаған эштәрен еренә еткерерҙәй кешеләрҙең бергә тупланыуы мөһим, шунһыҙ ТИҮ исем өсөн генә буласаҡ. Халҡыбыҙ араһында милләтебеҙ киләсәге өсөн янып торған эшмәкәр һәм фиҙаҡәр шәхестәрҙең булыуы шик тыуҙырмай һәм киләсәктә берҙәм булып, үҙебеҙ хәл итә алған мәсьәләләрҙе бергәләп сисеп, еребеҙгә, телебеҙгә, динебеҙгә, милләтебеҙгә артабан үҫергә шарттарҙы үҙебеҙ тыуҙырырбыҙ, тип ышанам.

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**



Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ -**"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** һәм 10 уҡыусыбыҙ Гөлфиә Янбаеваның **"Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** тигән китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ҡаҙағстандың Астана ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре булып үтте, унда республиканың эшлекле даирәләре һәм фән вәкилдәре, рәсми кешеләр делегацияһы, Ҡаҙағстанда йәшәүсе башҡорт диаспораһы вәкилдәре ҡатнашты. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ҡаҙағстандың Премьер-министры Серик Әхмәтов менән осрашты.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Федерацияһы Дәүләт советы Президиумы составына ротация ҡабул итте. РФ Дәүләт советы Президиумының яңы составына Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов инде.

✓Астанала үткән ике яҡлы сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек перспективаларын баһалау буйынса түңәрәк өҫтәлдә Башҡортостандың инвестиция, сәнәғәт һәм интеллектуаль потенциалы тәҡдим ителде. Ғилми форумда Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан социологтары киләсәктә этник үҙаң, милләт-ара толерантлыҡ һәм социаль структураларҙы үҫтереү кеүек уртаҡ ғилми проекттарҙы бергәләп тормошҡа ашырырға, тигән ҡарар ҡабул итте. Башҡортостанды презентациялауҙың беренсе көнө М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары башҡарыуында Сыңғыҙ Айтматовтың "Аҡ пароход" пьесаһы буйынса спектакль менән тамамланды.

✓Рәсәй Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы коллективын Идаралыҡтың яңы етәксеһе - генерал-майор Олег Гайденко менән таныштырҙылар, был вазифаға ул Рәсәй Президентының 13 сентябрҙәге Указы менән тәғәйенләнгән, тип хәбәр итә ведомствонаң матбуғат хеҙмәте. Идаралыҡты 2009 йылдан етәкләгән генерал-лейтенант Виктор Палагин Мәскәүгә дәүләт хеҙмәтенә күсерелде.

✓РФ Президенты Владимир Путин быйыл 22 октябрҙә Өфөлә дәүләт башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышын үткәрергә ҡушты, тип хәбәр итә Интерфакс. РФ Президентының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған бойороғона ярашлы, ултырышта РФ субъекттарында дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу мәсьәләһе тикшереләсәк.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ТӨҪӨ БАРҘАН ТӨҢӨЛМӘ...

**"Кеше бар яҡтан да матур булырға тейеш: йөҙө лә, кейеме лә, күңеле лә, уйҙары ла…" тигән Антон Чехов. Донъя әҙәбиәте классигының был һүҙҙәрендә беҙ һәр йәһәттән дә камил, идеаль кешене күҙ алдына баҫтырабыҙ. Әммә йәшәйеш ысынбарлығының парадоксы шунда: һимергән кешенең күҙҙәре ҡыҫыла барған кеүек, ниндәйҙер капиталға, байлыҡҡа эйә булыусыларҙың күңел ҡапҡалары ла ҡыҫыла, ябыла бара. Үкенескә күрә, кеше матурыраҡ күренгән, матурыраҡ кейенгән, затлыраҡ ризыҡ ейгән һайын уның эске донъяһында бөтөнләй башҡа төрлө процестар башлана шул. Шуға күрәлерме, ошо хаҡта фекер йөрөткән халҡыбыҙ ябай ғына итеп "Төҫө барҙан төңөлмә" тигән дә ҡуйған. Ошо әйтемдең асылына төшөнөп ҡарайыҡ, булмаһа.**



Бер мал аҡһаҡалға бик йәш һәм ҡалаҡка һалып йоторлоҡ һылыу бер ҡыҙ килгән дә, күҙ йәштәрен көскә тыя-тыя:

-Миңә ни эшләргә икән, олатай? Һәр ваҡыт кешеләргә яҡты йөҙ күрһәтһәм дә, берәһенә лә зыян итмәйенсә, хәлемдән килгәнсе ярҙам итергә тырышһам да, үҙемдең ихлас мөнәсәбәтемә, эскерһеҙлегемә яуапҡа йәберләү, көлөү, мыҫҡыллау һүҙҙәре генә ишетәм. Улар хатта асыҡтан-асыҡ минең менән дошманлашыуға, кеше алдында йөҙөмдө йыртыуға тиклем барып етә. Минең кешеләр алдында бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ һәм бындай мөнәсәбәттәрҙе артабан күтәрерлек хәлем дә ҡалманы. Кәңәше биреgeҙсе, олатай... - тигән иламһырап.

Аҡһаҡал һылыуға күҙ һалған да:

-Ә бына һин хәҙер сыр яланғас ҡалғансы сисен дә, ҡала урамы буйлап инәнән тыума көйгә бер үтеп ҡара, - тигән шаян йылмайыуына оло мәғәнә һалған ҡиәфәттә.

-Олатай, һеҙ ниңә минән көләһеғеҙ, әллә аҡылығыҙҙан яҙҙығыҙмы? - тигән һылыу аҡһаҡалдың кәңәшен бер нисек тә ҡабул итергә белмәйенсә һәм уның кинәйәһен аңлап бөтмәйенсә. - Ундай ҡиәфәттә урамда йөрөһәм, оло мәсхәрәгә ҡаласаҡмын бит. Хоҙай ҙа бының өсөн яҙаһыҙ ҡалдырмаясаҡ...

Ошонан һуң аҡһаҡал өйөнөң ишеген асып ебәреп, өҫтәлгә көҙгө ҡуйған да:

- Бына, күрәһеңме, һин үҙеңдең нәфис тәнеңде яланғасландырып, кеше алдында сығырға ояламаһың, ҡурҡаһың. Шулай булғас, ниңә күңелеңде яланғасландырып, шарран асылып, донъя алдында оялмайынса йөрөп ятаһың һуң? Күңелең һинең бына ошо ишек кеүек шарран асыҡ. Ул ишектән кем йыбанмай, шул тормошоңа туранан-тура инеп-сығып, үтәнән-үтә йөрөй ала. Улар, ошо көҙгөләге кеүек, үҙҙәренең гонаһтарының һинең күңелеңдәге кире сағылышын күрә лә, һине кәмһетә, мәсхәрәләй, өҫтөңә бысраҡ өйә башлай. Берәүҙең дә башҡаларҙан кәм булғыһы килмәй, уларҙың барыһы ла үҙҙәренең кәмселеген танырға һәләтле түгел. Гонаһлы кеше үҙенең гонаһын танырға, яҡшы яҡҡа үҙгәрергә теләмәйенсә, һәр ваҡыт намыҫлы кеше менән булыша, уны кәмһетеү иҫәбенә үҙен күтәрергә тырыша, - тип аңлатып биргән.

-Ә миңә ни эшләргә һуң, олатай? - тигән һаман да тынyслана алмаған һылыуҡай.

-Әйҙә, мин һиңә үҙемдең баҡсамды күрһәтәм, - тип аҡһаҡал ҡыҙҙы баҡсаһына алып сыҡҡан.

Баҡсаһындағы нәфис сәскәләр янына килеп еткәс, аҡһаҡал ҡыҙға түбәндәгеләрҙе әйткән:

- Мин бына нисәмә йыл буйына ошо нәфис сәскәләрҙе тәрбиәләйем, уларға һыу һибәм. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың таждарының ҡасан һәм нисек итеп асылғанын күргәнем булманы. Таждары асылғанын күрмәһәм дә, мин уларҙың матурлығына һәм хуш еҫтәренә һоҡланып бөтә алмайым. Һин дә ошо сәскәләр кеүек бул, ҡыҙым: кешеләргә йөрәгеңде һиҙҙермәйсә генә, ҡабаланмай ғына ас. Һинең ысын асылыңды белгән кеше таждарың асылмаҫ уҡ баһаңды белер, нәфислегеңдә, изгелегеңдә күрер, төҫөңә ҡарап, күңел торошоңдо самалар һәм шифалы һыуҙар менән һине һуғарыр, һәм һин уға үҙеңдән-үҙең асылғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың...

-Төҫөңә ҡарап, күңел торошоңдо самалар, тиһең дә ул, олатай, әммә был ҡағиҙә миңә ҡағылмайҙыр инде, - тип тағы ла күңелһеҙләнгән һылыуҡай.

-Төҫө барҙан төңөлмәйҙәр, ҡыҙым, бына күрерһең. Һин үҙеңә тейешле хаҡ баһаны барыбер алаҫаҡһың. Тик ваҡытынан алда әрһеҙләшергә генә ярамай...

-Мин кешеләргә эскерһеҙ мөнәсәбәтем, ярҙамсыл булыуым менән әрһеҙләшәмме ни, олатай?

-Эскерһеҙлектә лә, ярҙамсыл булыуҙа ла сама булырға тейеш, ҡыҙым. Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа...

Әлеге "Төҫө барҙан төңөлмә" әйтеменең мәғәнәһен ошо риүәйәттән сығып та аңларға булалыр. Әммә ләкин барыбер ҙә иң мөһиме булып тойолған бер мәсьәлә барыбер ҙә тороп ҡала: тышҡы ҡиәфәт күп осраҡта эске сифатҡа тап килмәүе лә бар бит. Йылмайған кешелә лә мәкер була, тыштан һандуғастай һайрап, эстән теш ҡайраусылар ҙа, тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап тороусылар ҙа була. Был осраҡтарҙа нисек?

Быны аңлар өсөн Көньяҡ Африканың "Бабемба" тигән ҡәбиләһендәге бер сәйер йоланы миҫал итеп килтерергә була. Унда башҡа ҡәбиләләрҙән айырмалы рәүештә, яуызлыҡ ҡылған кешене мөхәббәт менән язалау йолаһы һаҡланып ҡалған. Яза башланғанда енәйәтсене майҙан уртаһына ултыртып ҡуялар. Артабан ҡәбиләләштәре бер нисә көн һуҙымында уның янына килеп, ҡылған изгелектәрен иҫкә алып, яҡшы мөнәсәбәтен һүҙ менән белдереп сыға, икенсе һүҙ менән әйткәндә, мөхәббәтен белдерәләр. Язаланыусыға был осраҡта йоҡларға ла, ял итергә лә ирек бирелмәй. Ахыр сиктә, яуызлыҡ ҡылыусы тик яҡшы ғына һүҙҙәр ишетеүҙән һыу эскеһеҙ булып арый, үҙ-үҙенән, ҡылған ҡылыҡтарынан оялыуҙан выждан ғазабы кисерә башлай һәм илай-илай, тәүбәгә килеүен белдереп, бауырҙаштарына үтенергә, ялбарырға тотона. Аҙаҡ күңеле таҙарынған был әҙәм барлыҡ ырыуҙаштары менән ҡосаҡлашып сыға һәм язалау процесы ла ошонон менән тамам була.

Был ҡәбилә халҡы ла ошо йоланы атҡарған ваҡытта "Төҫө барҙан төңөлмә" тигән принципҡа таянып эш иткәнлеге күренеп тора.

Донъяға бер кем дә яуыз уйлы, насар ниәтле йәиһә енәйәтсе булып тыумай бит инде. Әлбиттә, ул үҙен тыуҙырыусыларға хас генетик код менән тыуа, шулай ҙа сабыйҙың үҙендә яуызлыҡ булмай. Кеше үҙ ғүмерендә кисергән йәшәү, тәрбиә шарттарында төрлө кимәлгә өлгәшә, кемдер берәү яҡшы гәзәттәрҙе үҙләштерә, бәғзеләре насарҙарына күнегә. Шулай ҙа уның сабый асылындағы сифаты, икенсе төрлө әйткәндә, төҫө, барыбер ҙә һаҡланып ҡала һәм экстремаль осраҡтарҙа йәки үлем менән осрашҡанда кеше барыбер ҙә шул сифатына, шул төҫөнә әйләнеп ҡайта, тиҙәр. Әйтемдә тап ана шул төҫ хаҡында һүҙ бара ла инде. Кем белә, бәлки әҙәмде башҡа тере йәндәрҙән айырып торған төп сифат та шул төҫтөр. Әҙәм төҫө.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Милли музейының 150 йыллығы менән бәйле 2014 йылда дәүләт бюджет мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеһының юбилейына арналған саралар үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.

✓ Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала 1 октябрҙән 3-өнә тиклем Төрксой Даими советының XXXI ултырышы үтте. Ултырыш эшендә беҙҙең республиканан Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Шамил Абдраҡов барҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, XXX ултырыш 2012 йылдың сентябрендә Өфөлә үткәрелгәйне. Министрҙар һәм делегация башлыҡтарының Төркиә Республикаһы Президенты Абдуллах Гюль менән осрашыуы үткәрелде.

✓ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева Ҡара диңгеҙ иҡтисади хеҙмәттәшлеге Парламент ассамблеяһы делегацияһы составында, БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев БДБ илдәренән Күҙәтеүселәр миссияһы составында Әзербайжан республикаһы Президентын һайлауға күҙәтеүселәр сифатында ҡатнашты. Әзербайжан Республикаһы президентын һайлау 2013 йылдың 9 октябрендә үтте.

✓ Башҡортостан территорияһында экологияны бысратыусы предприятиелар төҙөлмәйәсәк, тине Өфөлә үткән IV төбәк-ара экологик форумда республика Президенты. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә өҫтөнлөклө бурыстар иҫәбендә - "Химпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәте һәм Баймаҡ районындағы Семенов алтын сығарыу фабрикаһы территорияларын таҙартыу. Республика "Тупланған экологик зыянды бөтөрөү" Федераль маҡсатлы программаһына эләкте. Уның буйынса республикаға 10 млрд. һум бүленәсәк.

✓ Башҡортостандың 41 районынан 104 фермер ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереүгә, крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары ойоштороуға һәм үҫтереүгә гранттар алды. Быйыл яңы эш башлаусы фермерҙарға ярҙам һәм ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү программаларын тормошҡа ашырыуға ике кимәлдәге бюджеттарҙан 189 миллион һум самаһы аҡса бүленде. "Яңы эш башлаусы фермер" программаһы буйынса 2012 йылда 225 ғариза бирелһә, 2013 йылда иһә уларҙың һаны әлеге ваҡытҡа 270-кә етте. Ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү программаһы буйынса ла шундай уҡ күренеш күҙәтелә: 2012 йылда 64 ғариза булһа, 2013 йылда - 103.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Йәмғеһе 9 миллион 600 мең квадрат метр урам юлдары, кварталдар араһындағы һәм йорт эргәләрендәге 8 миллион 450 мең квадрат метр территория таҙартылған. 2800 үҫенте, 2500 ҡыуаҡ ултыртылған.*



*БАШ ЙОРТТА*



# ЙӘШ ҠЫҘҘАЙ...
## биҙәнде Өфөбөҙ

**Башҡортостандың иң төп байрамдары булған Суверенитет тураһында декларация ҡабул итеү көнөнә баш ҡала айырыуса ҙур әһәмиәт бирә һәм бер ай алдан әҙерләнә башлай. Быйыл да сентябрь башынан уҡ ҡаланы санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡ иғлан ителде. Был дөрөҫтөр ҙә, сөнки баш ҡала республика райондары һәм ҡалалары өсөн өлгө булып тора.**

Көҙҙөң беренсе айында уҡ ҡала территорияһын таҙартыу буйынса 193 мең кеше ҡатнашып, 9 мең берәмек техника йәлеп ителеп, һөҙөмтәлә 46 мең кубометр сүп-сар полигонға сығарылған. Шулай уҡ "ӨфөҠалаУты" МУЭСП-һы 2 мең яҡтылыҡ нөктәһенә, 15 километр урамдарҙы яҡтыртыу сығанаҡтарына һәм 35 километр байрам иллюминацияһына ревизия үткәрә. 11 октябрҙән урамдар тулыһынса яҡтыртылды һәм байрам иллюминацияһы эшләй башланы.

Юл хәрәкәтен ойоштороуҙың техник сараларына ла ҙур иғтибар бирелде. "СУРСИС" МУП-ы тарафынан 31 мең квадрат метр майҙанда термопластик, 135 мең квадрат метрҙа буяу менән юл билдәләре эшләнде, 2 мең юл билдәһе ҡуйылды, 315-е алмаштырылды, 165-е ремонтланды, 186-һына демонтаж үткәрелде. Мәктәпкәсә белем биреү һәм мәғариф учреждениелары эргәһендәге юлдарға "Балалар" һәм "Максималь тиҙлекте сәғәтенә 40 километрғаса кәметеү" тигән 885 яҙыу яҙылды.

5 октябрҙә иһә дөйөм ҡала өмәһе үтте. Барлыҡ тармаҡ хеҙмәткәрҙәре һәм төрлө милек формаларындағы ойошмаларҙа эшләүселәр үҙ коллективтары урынлашҡан территорияларҙы таҙартты. Был көндө ҡаланы санитар таҙартыуҙа 105 мең, юлдарҙы таҙартыуҙа 6700 кеше ҡатнашып, барлығы 918 берәмек техника йәлеп ителгән. Йәмғеһе 9 миллион 600 мең квадрат метр урам юлдары, кварталдар араһындағы һәм йорт эргәләрендәге 8 миллион 450 мең квадрат метр территория таҙартылған. 2800 үҫенте, 2500 ҡыуаҡ ултыртылған.

Ял зоналарын булдырыу һәм реконструкциялау, тәрбиәләү буйынса эш тә әүҙем алып барылды. Мостай Кәримгә бағышланған скульптура композицияһын урынлаштырыу тамамланды һәм уның тирә-яғы төҙөкләндерелде. Пушкин, Ғафури урамдарында скверҙар булдырылды, Ленин урамындағы тротуар, Ленин урамы буйлап Зәки Вәлиди урамынан Пушкин урамына һәм Салауат Юлаев баҡсаһына тиклем йәйәүлеләр зонаһы ремонтланды.Ял көндәрендә баш ҡала халҡының, Өфө ҡунаҡтарының мәҙәниәт һәм ял парктарында йөрөргә яратыуын иҫәпкә алып, уларҙа ла тейешле тәртип булдырылды. Бының өсөн барлығы 250 берәмек техника һәм 500 юл эшсеһе йәлеп ителде. Ғөмүмән, көҙҙөң һалҡын тыны өтөп барғанда ла баш ҡаланың республиканың төп байрамына йәш ҡыҙҙай биҙәнеп-төҙәнеүе үҙе уҡ күңелдәрҙе күтәрә, йөрәктәргә дәрт һала.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Республика көнө алдынан мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт, киң мәғлүмәт саралары, ижтимағи һәм башҡа йәмғәт ойошмалары вәкилдәренә дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе үҫтереү, пропагандалауға индергән өлөшө өсөн Өфө ҡала округы хакимиәтенең премияларын тапшырыу хәҙер инде матур бер йолаға әүерелде.**

# АСЫЛДАРЫ - ТУҒАН ТЕЛГӘ ТОҒРОЛОҠ

Ҡала башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов әйтеүенсә, уҙған ете йыл эсендә был премияға 128 кеше һәм туғыҙ коллектив лайыҡ булған. Быйыл иһә исемлек тағы ла 20 кешегә тулыланды. Бүләкләнеүселәр араһында уҡытыусылар, шул иҫәптән музыка мәктәбе уҡытыусылары, журналистар, балалар баҡсалары тәрбиәселәре, шулай уҡ бер иҡтисад фәндәре кандидаты бар. Һәм был премия муниципаль ғына түгел, ә республика учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен дә дәртләндереүгә йүнәлтелгән.

- Бөгөн дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе артабан үҫтереү, камиллаштырыу өсөн Өфөлә бик күп эштәр эшләнә, - тине Сынтимер Биктимер улы. - Төрлө инновацион белем биреү программалары әҙерләнә һәм уҡыу процесына индерелә, конкурстар, фестивалдәр, байрамдар, семинарҙар һәм башҡа тематик саралар уҙғарыла. Шулар араһында Салауат Юлаев көндәре, Халыҡ-ара Аксаков байрамы, Славян мәҙәниәте һәм яҙмаһы фестивале, Шәжәрә, "Бөйөк рус һүҙе", "Рус телен һаҡлаусылар" байрамдары һ.б. айырым иғтибарға лайыҡ һәм айырым урын алып тора. Барлыҡ ошо мәҙәни, социаль әһәмиәтле программаларҙы тормошҡа ашырыуҙа, әлбиттә, премия лауреаттарының роле бик ҙур".

Быйылғы премия лауреаттары араһында ошо тантаналы көнгә килеп етмәүселәрҙең булыуы бер аҙ күңелгә һағыш һалды. Олег Миронов, мәҫәлән, Ленин районының 2-се дөйөм белем биреү мәктәбендә Башҡортостан тарихын һәм мәҙәниәтен уҡыта, бөтөн ғүмерен балаларға арнап, бынан бер ай самаһы элек кенә яҡты донъя менән хушлаша. Әммә комиссия уның туған телдәрҙе, мәҙәниәттәрҙе, тарихты үҫтереүгә индергән өлөшөн лайыҡлы баһалай һәм ҡала округы хакимиәте башлығының ошо өлкәләге премияһы уның ҡатынына тапшырылды. Бүләкләнеүселәр араһында әүҙем авторыбыҙ, һәр һан һайын үҙенең кроссворд, сканвордтары менән ҡыуандырып торған һәм бүләкләнеүселәр араһында берҙән-бер "телсе" түгел, ә иҡтисадсы булған Илдар Ғәбитовтың да булыуы гәзитебеҙгә тағы ла абруй өҫтәй. Уның хаҡында юҡҡа ғына: "Ҡалалағы бик күп хаталар уның осло күҙенә эләккәндән һуң төҙәтелде. З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә уның үҙенсәлекле кроссвордтар, сканвордтар һәм башваткыстар китабы башҡорт донъяһында айырым һәм лайыҡлы урын алып тора", - тиелмәне тантанала. Ә инде бөгөнгө оптималләштереү һылтауы һәм күптәрҙең ҡануниәтте белмәүе арҡаһында "милли телдәрҙе ҡыҫалар" тип юҡтан ғына проблема тыуҙырғанда, башҡорт, татар, рус теле уҡытыусылары, балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, район хакимиәттәренең мәғариф бүлеге методистары ысын мәғәнәһендә туған телдәрҙең һағында уяу һәм тоғро тора. Тап улар балаларҙа әсә теленә һөйөү тәрбиәләп кенә ҡалмай, ата-әсәләр араһында ла аңлатыу эше алып бара.

Юҡҡа ғына Сынтимер Биктимер улы үҙенең ҡотлау сығышында: " Һеҙ, һис шикһеҙ, изге эштең энтузиастары булып тораһығыҙ, үҙегеҙҙең тәжрибәгеҙҙе, белемегеҙҙе, оҫталығығыҙҙы, ижади ҡеүәтегеҙҙе республика халыҡтарының рухи мәҙәниәтен үҫтереүгә бағышлайһығыҙ. Асылығыҙҙың төп маҡсатына - туған телде - һәр милләттең иң ҙур байлығын һаҡлауға тоғро ҡалаһығыҙ", - тимәгәндер.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был мәртәбәле премияға быйыл "Киске Өфө" гәзитенең әүҙем авторы, иҡтисад фәндәре кандидаты Илдар Ғәбитов менән бергә журналисыбыҙ Зәйтүнә Әйле лайыҡ булды. Уҡыусыларыбыҙ баш ҡалабыҙ Өфө тураһындағы мәғлүмәттәр, яңылыҡтар менән башлыса Зәйтүнә Әйле яҙмалары аша таныша. Ул оператив эшләгән, хәбәрҙәрҙе аналитик иләк аша үткәреп әҙерләй белгән журналист һәм, әлбиттә, әлеге премияға лайыҡ. Ҡотлайбыҙ!**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәскәүҙә "Алтын көҙ" XV Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһе асылды. Башҡортостандың күргәҙмә стенды 140 квадрат метр майҙанда урынлаштырылды. Төбәктең 20 ауыл хужалығы предприятиеһы күргәҙмәгә үҙенең төрлө продукцияһын килтерҙе. Төп иғтибар милли аш-һыуға бүленде. "Алтын көҙ-2013"-төң төрлө конкурстарында Башҡортостандың 100-гә яҡын ойошмаһы ҡатнашты.

✓Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында 19 октябрҙән Йәш психолог мәктәбе үҙ эшен башлаясаҡ. Бушлай дәрестәргә 9-11-се синыф уҡыусылары йөрөй ала. Лекциялар шәмбе көндәрендә (ике аҙнаға бер тапҡыр) 16 сәғәттән 21 сәғәткә тиклем уҙғарыласаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәтте түбәндәге адрес буйынса психология факультетының дөйөм һәм социаль психология кафедраһында алырға мөмкин: 450076 Өфө ҡалаһы, Чернышевский урамы, 25а, БДПУ-ның 5-се уҡыу корпусы, телефон: (347)251-70-56.

✓БР Мәҙәниәт министрлығы хеҙмәткәрҙәре һәм уның ведомствоһындағы ойошмалар Амур буйында, шулай уҡ Башҡортостандың Әбйәлил һәм Белорет райондарында һыу баҫыуҙан зыян күреүселәргә ярҙам итә. Ошо маҡсаттан концерт залдарында һәм театрҙарҙа хәйриә спектаклдәре һәм концерттары ойошторола. 30 октябрҙә - Башҡорт дәүләт филармонияһы, 14 ноябрҙә - М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, 5 декабрҙә Ф.Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле хәйриә тамашалары үткәрәсәк.

✓14 октябргә тиклем "Таланттар йондоҙлоғо" IV асыҡ республика мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәр ижады конкурсында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Һайлап алыу турҙары 19 һәм 26 октябрҙә, 2 ноябрҙә үткәрелә. Конкурстың II этабы 23 ноябрҙә үтәсәк, ә декабрҙә гала-концертта йомғаҡ яһаласаҡ.

✓18, 19 октябрҙә Өфө ҡала мәҙәниәт һарайында "Юлдаш йыры - 2013" республика асыҡ конкурсының Йомғаҡлау концерты буласаҡ. Тәүге көндә "Юлдаш йыры"нда ҡатнашыусылар сығыш яһай, баһалама ағзалары еңеүселәрҙе билдәләй. Икенсе көндә иһә "Юлдаш хит-парады"ның сағыу йондоҙҙары сығышы көтөлә. Билеттар ҡала кассаларында һатыла. Белешмә өсөн телефон: 273-03-41.

*✓ Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк" тигән ораны бөгөн дә беҙҙең өсөн әһәмиәтле булып ҡала бирә. Шуға ла белем алыуға етди ҡарайыҡ, милләттәштәрем, сөнки киләсәк беҙҙән башлана!*

*БАШҠОРТОСТАНҒА ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ*

**Тыуған ил тойғоһо һәр кем өсөн иңдән-иң изге, иңдән-иң бөйөк тойғо, тиһәк, моғайын да, яңылышмаҫбыҙ. Һин - көс һәм илһам сығанағы. Һүнмәй торған күңел ялҡыны, шатлыҡ һәм ғазап, Тыуған илде яҡлаусыларҙың батырлығы, тыуған йорт, туған халҡың… Тыуған ил ул туған тел дә, мәҙәниәт тә, тарих та. Һәм, әлбиттә, Тыуған ил ул - ситтә йөрөгәндәрҙең әйтеп аңлатҡыһыҙ һағышы ла. Башҡортостан халҡы Республика көнөн билдәләгән мәлдә Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларҙа белем алып йөрөүсе йәштәребеҙгә республикаға һөйөү һүҙе әйтеү өсөн майҙан бирмәһәк, хилаф булыр ине. Шулай итеп, һүҙ - йәштәргә:**

# КИЛӘСӘК БЕҘҘӘН БАШЛАНА!




**Рәмилә ХӘСӘНОВА, Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты аспиранты:** Тыуған республикамды, шулай уҡ туғандарымды, дуҫтарымды, яҡындарымды һәм, әлбиттә, тәүге тапҡыр тәпәй баҫҡан ерем - Ейәнсура районы Өмбәт ауылы тәбиғәтен һағынмаған бер көнөм юҡ. Сит ерҙәрҙә, ғөмүмән, беҙҙәге кеүек тауға-урманға бай ерҙәр бөтөнләй юҡ, тиерлек. Алсаҡ, ҡунаҡсыл, итәғәтле, йомарт халҡымды ла һағынам. Мәскәүҙә кешеләр бер-береһен белмәй ҙә, белгеһе лә килмәй. Бында һәр кем үҙе өсөн йәшәй һәм бында һин бер кемгә лә кәрәкмәйһең. Бары тик үҙеңдең тырышлығың, ихтыяр көсөң менән генә был ҡалала йәшәп, ниндәйҙер бейеклектәргә үрләп була. Халҡыбыҙҙа булған тәрбиә үҙенсәлектәренә һоҡланам, Мәскәүҙәге милләттәштәрем үҙҙәренең ғаиләләрендә башҡорт телендә һөйләшеп, башҡортса бишек йырҙары тыңлап, әкиәттәр-риүәйәттәр уҡып үҫкәнгә лә үҙ халҡын бер минутҡа ла иҫенән сығармай, туған телебеҙҙең бар матурлығын күңелдәребеҙгә һала белгән өсөн атай-әсәйҙәребеҙгә рәхмәт! Сит ерҙә лә башҡорт рухын һаҡлап ҡалыуыбыҙға йолаларыбыҙға тоғролоҡ, яҡташтарыбыҙ менән осрашыуҙар ойоштороу, төрлө интеллектуаль һәм мәҙәни саралар үткәреү ҙә ярҙам итә, тип уйлайым. Концерттар, брейн-ринг, йыр кисәләре, башҡортса КВН, шулай уҡ ҡурайҙа уйнау, халыҡ бейеүҙәре анмсамбленә йөрөү ҙә рухыбыҙҙы күтәрә.

Һәр илгә алдынғы булыу өсөн белемле белгестәр һәм халыҡтың берҙәм булыуы кәрәк. "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" ти халыҡ, әгәр ҙә милләтебеҙҙең ҙур өлөшө белемле булһа, ул көсөн ҡайҙа йүнәлтергә белер ине. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыуҙар күрһәтеүенсә, Башҡортостанда юғары белемлеләр һаны Волга буйы федераль округында иң һуңғы урындарҙа тора. Тимәк, Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк" тигән ораны бөгөн дә беҙҙең өсөн әһәмиәтле булып ҡала бирә. Шуға ла белем алыуға етди ҡарайыҡ, милләттәштәрем, сөнки киләсәк беҙҙән башлана!

**Әбйәлил ҮТӘБАЕВ, Санкт-Петербург дәүләт урман-техник университеты студенты:** Тыуған яғындың ҡәҙере ситтә нығыраҡ беленә икәнлеген үҙемдең елкәмдә татып белә башлауыма хәҙер биш йыл да булып киткән. Санкт-Петербургта уҡый башлаған мәлдә шул тиклем ҡайтҡы килә торғайны, хәҙер инде мин республикамды ваҡытлыса ғына ҡалдырып торғанлығымды, бының өсөн етди сәбәптәр - минең осрағымда белем алыу - булыуын аңлайым һәм барыһын да шулай тейеш, тип ҡабул итәм. Шуны ла беләм: әгәр ҙә мин республика вуздарының береһендә уҡыһам, "Тыуған ил" тигән төшөнсәне был тиклем тәрәнлектә аңламаҫ инем. Бына һәр беребеҙгә тыуған өйөндә рәхәт бит, мин дә ана шул тыуған илдә рәхәт инде ул, тип әйтеүҙән уҙа алмаҫ инем, моғайын. Ситтән ҡайтып, тыуған ереңә аяҡ баҫыу менән кисергән ҡәнәғәтлек тойғоларын һүҙ менән дә әйтеп аңлатып булырлыҡ түгел. Башҡортостан минең өсөн ауыр ваҡыттарҙа үҙенсәлекле терәк, ҡалҡан кеүек, мин республикамда үҙемде һәр ваҡыт яҡлаулы тоясаҡмын. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, нимә генә эшләһәм дә, Тыуған илем минең йөрәгемдә һәр ваҡыт ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғолар уятасаҡ. Бер яҡтан, ул һағыш тойғоһо менән ауаздаш, сөнки унан йыраҡтамын, икенсе яҡтан, шатлыҡ-ҡыуаныстар уята, сөнки минең тыуған илем, республикам бар.

**Усман ЮНЫСОВ, Рәсәй дәүләт технология университеты студенты:** Тыныс, таҙа һауалы тыуған ер һағындыра инде ул, ҙур ҡала ағымында оҙаҡ йөрөй торғас, уның баҫымына сыҙамай башлаған мәлдәрҙә мин үҙемдең тыуған ауылымды күҙ алдына килтерә һалам. Ираклек, күңел тыныслығын тыуған ер генә бирә ала, күрәһең. Шуныһы ҡыҙыҡ, ситтә тыуған илдең, ерҙең ҡәҙерен күберәк аңлайһың. Уның менән ғорурланыу, милләттәштәреңә ихтирам, хөрмәт тойғоһо менән бағыу тәрбиәләнә. Ҡайһы саҡта, их, ошо тойғоларҙы үҙ ерендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ кисерә алһа ине, тип ҡуяһың, сөнки ҡайһы бер саҡта халҡыбыҙҙа башҡаларҙың хәлен тойоп, ярҙам итеп йәшәү тойғоһо юҡҡа сыға барған кеүек тойолоп китә. Ғөмүмән, беҙгә хәҙер "Берҙәмлектә - көс" тигән девиз менән йәшәй башларға ваҡыт. Бына, мәҫәлән, беҙ Мәскәүҙә уҡыһаҡ та, төрлө саралар ойоштороп, башҡорт рухын һаҡлап ҡалыу өсөн барыһын да эшләйбеҙ. Үҙ-ара бәйләнеште өҙмәйенсә, татыу булһаҡ ине.

**Әлфир ИЛБАҠТИН, Силәбе өлкәһе башҡорт йәштәре берлеге рәйесе:** Беҙ, тарихи Башҡортостан территорияһында, әммә хәҙер инде Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәгендә йәшәүселәр, республикабыҙға шатланып та, һоҡланып та бағабыҙ. Телебеҙ, йолаларыбыҙҙы һаҡлаусы ла ул. Бында һәр нәмә башҡорттоң тарихын һаҡлай, тарих ошонда уҡ дауам итә. Ябай, еңел яҙмышлы түгел халҡым, уның тарихында азатлыҡ өсөн ихтилалдар ҙа, һуғыштар ҙа, инҡилаптар ҙа булған һәм улар беҙҙе нығытҡан, сыныҡтырған ғына. Бөгөнгө көндә башҡорт йәштәренең уҙаңы үҫә, рухы күтәрелә барғанын күрәм, былар барыһы ла киләсәктә башҡорт халҡының һәм республиканың үҫешенә, нығыныуына, сәскә атыуына килтерәсәгенә иманым камил. Шуның өсөн дә бөгөн ошо рухи күтәрелешкә бар көстәр менән ярҙам итеү кәрәк. Милли рухты уятыусы саралар, проекттар ҙа кәрәкле һәм мөһим эш буласаҡ. Эшмәкәрлегебеҙҙең бөтөн йүнәлештәрендә башҡорт брендтарын булдырыу, шулай уҡ туған телебеҙҙе һаҡлау ҙа беҙҙең ҡулдарҙа. Шулай уҡ һәр беребеҙ уңышҡа ынтылайыҡ, шул саҡта ғына тотош йәмғиәт уңышлыға әүереләсәк. Иң мөһиме - беҙҙең көсөбөҙ берҙәмлектә. Шул саҡта ғына халҡыбыҙ бар ауырлыҡтарҙы ла еңеп сыға аласаҡ. Республика көнөндә Силәбе өлкәһенең башҡорт йәштәре исеменән тыуған илебеҙгә тыныслыҡ һәм уның сәскә атыуын теләйем!

**Әлфиә КҮСӘРБАЕВА, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте эргәһендәге Финанс университеты студенты:** Икенсе йыл инде Башҡортостандан ситтә уҡыйым. Ошо ваҡыт эсендә "Тыуған илдең әреме лә хуш еҫле" тигән мәҡәлдең асылына ныҡлап төшөндөм. Атай-әсәй, туғандар ғына түгел, республиканың тәбиғәте лә һағындыра. Тырыш халҡыбыҙ өсөн шатланам, беҙҙәге кеүек төҙөк ауылдарҙы Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә күргәнем юҡ.

Мәскәүҙә Башҡортостанды, уның тәбиғәтен генә түгел, ваҡыттың да ҡәҙерен белергә өйрәнәһең. Сөнки беҙ республикабыҙға белемле кешеләр булып ҡайтырға тейешбеҙ, бының өсөн бер минут ваҡытты ла әрәм итергә ярамай. Мәскәү төрлө мөмкинлектәр ҡалаһы, беҙ быны мөмкин тиклем файҙаланып ҡалырға тейешбеҙ. Уҡыуҙан тыш, милләттәштәребеҙ менән төрлө саралар ойошторорға, аҙна һайын тиерлек күрешеп торорға өлгөрәбеҙ. Республиканан ситтә минең менән бер фекерҙә булған, Башҡортостандың бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн янған ҡыҙҙар-егеттәрҙе осратыуыма бик шатмын. Тыуған яҡтан алыҫта булһаҡ та, уның тормошо беҙгә яҡын һәм республикабыҙҙың үҫешенә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тырышабыҙ. Аяҙ күк йөҙө, имен көндәр һиңә, яратҡан Башҡортостаным. Байрамың ҡотло булһын!

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА, Ҡытай Халыҡ Республикаһының Ляолинь университеты студенты:** БДУ-ның төрлө факультеттарынан бер төркөм студенттарҙы, шул иҫәптән роман-герман филологияһы факультетынан мине лә, сентябрҙә Ҡытайҙың Шэньян ҡалаһындағы Ляолинь университетына уҡырға ебәрҙеләр. Ҡытай телен өйрәнәбеҙ. Уны үҙебеҙҙең Башҡорт дәүләт университетында уҡ факультатив тәртиптә өйрәнә башлағайныҡ инде, шуға ла иероглифтар донъяһы әллә ни көтөлмәгән шаңҡыу булманы. Шаңҡыуҙар икенсерәк юҫыҡта башланды: сит телмәргә, сит халыҡ менән аралашыу рәүешенә һис өйрәнеп булмай йонсотто. Хатта ҡала шау-шыуы ла, йыр-көйҙәре лә ҡолаҡҡа ятмайыраҡ торҙо. Урамға сыҡһаң, бөтә ерҙә кеше, ә һин үҙеңде япа-яңғыҙ ниндәйҙер бер утрауҙа йөрөгәндәй хис итәһең. Бына бер көн ҡыҙҙар менән магазиндарға инеп, аҙыҡ-түлек ҡарайбыҙ. Төрөлгән тауар, аҙыҡ-түлек тышына фәҡәт ҡытайса яҙылған - нәмә һатып алғаныңды ла белмәҫһең. Һөт ризыҡтары яратам. Үҙебеҙҙең Өфөләге һөт-ҡаймаҡ, эремсек һығылып ятҡан кәштәләрҙе күҙ алдыма килтереп, ошо бүлеккә яҡынлайым, ләкин беҙҙәге һымаҡ "һөт йылғалары" ағып ятмай икән шул Ҡытайҙа... Шул саҡ яҡын танышымды осратҡандай, шатлығымдан ҡысҡырып ебәрҙем: кәштәлә Башҡортостанымдан килгән ҡуйыртылған Ҡарламан һөтө банкалары теҙелеп тора! Валлаһи, ҡыҙҙарым менән саҡ илап ебәрмәнек. Тыуған илебеҙҙең әсә һөтө булып тойолдо ул беҙгә. Ана бит, Башҡортостаныбыҙ ситтә лә беҙҙе нисек хәстәрләй, ҡурсый - һөт ебәргән, тип ҡыуанышабыҙ. Эйе, телен дә өйрәнербеҙ, халҡына ла, тәртиптәренә лә, тик ситтә йәшәргә генә өйрәнергә яҙмаһын. Тыуып-үҫкән илемдән айырмаһын Хоҙай, тип теләйбеҙ. Килеп тә өлгөрмәнек, ә Башҡортостаныбыҙҙы бик ныҡ һағынырға ла өлгөрҙөк инде... Ләкин бик-бик алыҫта ла үҙ республикабыҙ йылылыһын, хәстәрен тойоп торабыҙ бит, шуға ла һыр бирергә һис тә иҫәбебеҙ юҡ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ревматизм

❖ Быуындарҙа ревматизм булғанда һәм тоҙ ултырғанда 1,5 стакан ваҡланған гөлйемеш тамырын 1,5 литр араҡыла төнәтергә. 1-се өс көндә 1-әр ҡалаҡ төнәтмәне көнөнә 3 мәртәбә, ә ҡалған көндәрҙә 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

### Теҙ быуындары ауыртһа

❖ 50 грамм лавр япрағын 300 мл һыуҙа 5-8 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт термоста төнәтергә, марля аша һөҙөргә һәм көнө буйы ваҡ-ваҡ йотомдар менән эсергә. Бер эскәндә 1 ҡалаҡтан артыҡ ҡулланмаҫҡа. Икенсе һәм өсөнсө көндә лә төнәтмәне шулай эсегеҙ. Ете көн ял иткәс, тағы ҡабатлағыҙ. Дауаланыуҙы өс айға бер, ә унан һуң йылына бер тапҡыр ҡабатларға онотмағыҙ.

### Үттән таш сығарыу

❖ Дарыу аҡ сәскәһе, эт муйылы ҡайырыһы, бөтнөктө берәр өлөш алып ваҡлағас, ҡатнашманы 500 мл һыуҙа 5-7 минут ҡайнатырға, ярты сәғәттән һөҙөргә. Төнәтмәне 1,5 - 2 ай буйына көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң эсергә.

### Бәпембә төнәтмәһе

❖ Тамырҙары холестеринды кәметә, анемия булғанда ҡанды яҡшырта, үт ҡыуҙырыуҙы, тирләүҙе көйләй, йөҡларға, аллергиянан ҡотолорға ярҙам итә.

❖ 10 грамм бәпембә сәскәһен 200 мл һыуҙа 15 минут ҡайнатып, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йоҡоһоҙлоҡтан, гипертониянан, эс ташыуҙан, эс ҡатыуҙан, бабасырҙарҙан ҡотолоу өсөн көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 5-10 грамм ваҡланған бәпембә тамырын һәм үләнен 50 мл үҫемлек майында 10 сәғәт төнәтергә. Шуны янған, иҙелгән, бешкән урындарға һөртөргә.

### Йөрәк йыш типһә, невроз булһа

❖ Киптереп ваҡланған 2 балғалаҡ мелиссаны 2 стакан ҡайнар һыуға һалырға, 4 сәғәт төнәтергә. Һөҙгәс, шул төнәтмәне ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Төнәтмә тынысландырыу сифатына эйә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Быума сиренән им-том

**Быуманы ғәрләндереү.** "Быуманы мин күрҙем. Беҙҙең ауылда бер бала ауырый ине. Бер көн мин уларға керҙем. Күршеләр сәй эсеп ултыра, ә бала уйнап йөрөй. Бер ваҡыт бала шарылдап йығылып китте. Ҡараһам, баланың әсәһе тегенең трусиктарын, күлдәктәрен һыпырып алды ла, баланың битенә япты. Шунан теге әйберҙәрҙе ишеккә ҡыҫып-ҡыҫып, һыйыр тиҙәге аҫтына тығып ҡуйҙы. Ниңә күмгәнен белмәйем. Мин ул ҡатындың әйберҙәрҙе өс тапҡыр ҡыҫҡылап алыуын, ҡыҫҡанда эстән нимәлер уҡығанын, һөйләгәнен генә күрҙем", - тип яҙҙырҙы Аҡъярҙан З. Аҡбалина.

**Ағын һыуға ташлау.** Белорет районында быума менән ауырыған баланың әйберҙәрен ағын һыуға ташлайҙар, унан һуң мылтыҡтан аталар.

**Быума ҡыуыу әпсене.** Илеш районында яҙылған материалдарҙа быуманы һыйыр тиҙәгенә ҡыуыу, ҡыуғанда әйтелгән һүҙҙәр сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

*Ҡара болот киләлер.*
*Ҡара болот киләлер,*
*Ҡара болот аҫтынан.*
*Ҡара һыйыр киләлер.*
*Мөгөҙө күккә тейгән,*
*Елене ергә тейгән!*
*Бер имсәктән ҡан килә,*
*Бер имсәктән май килә,*
*Шуны аша, шуны тот!*
*Име-шомо шул булһын!*

**"Ен тишеге "эҙләү.** Быумалы кешене төрлөсә имләгәндәр. "Беҙҙә быуманың күҙенә ҡарап, ике ҡолағын ике ҡуллап тотоп, уға өргәндәр. Шунан тапсыҡ яндырып, эргәһендә ян-яҡҡа йөрөткәндәр, янған тапсыҡты быума ҡулына тотторғандар. Имсе үҙе ошо ваҡытта "ен тишеге" эҙләйем, тип, ике ҡуллап ауырыуҙың муйынын һыйпай. "Ен тишеге" ул ҡан тамыры быуылып, баш көбөгә инмәй торған ер икән. Имсе шул ерҙе оҙаҡ ыуа, шунан әҫе генә май тамыҙа. Ә үҙе ауырыуҙың ҡолағына: "Ен тишеген бешереп яптым, бүтән кермәй инде", - ти. "Ныҡ тот текмәне, үткәрмә", - ти ҙә төкөрә", - тип һөйләгәйне М. Ғиззәтуллина.

**Тауға ҡасыу.** Быума эйәһе һыуҙы яратмай икән. Шуға быумаға һыуға ҡарарға ярамаған. Кеше быуыла башлаһа, бейек тау башына ҡасҡан. Шунда ауырыу баҫыла, тиҙәр.

**Йәшен осоғон һорау.** Быуманы бөтөрөр өсөн йәшен осоғон һорағандар. Ышаныуҙар буйынса, йәшен һуҡһа, быума бөтә икән. Тик кешене йәшен һуҡһа, уны балаҫҡа, кейеҙгә төрөргә һәм усына бысаҡ, ҡайсы, энә һалырға, табан бармаҡтары араһына осло әйберҙәр ҡыҫтырырға, ә кендеккә көмөш тәңкә һалырға кәрәк.

**Кернә тартыу һәм башҡа им-том.** Ҡайһы бер әбейҙәр быуманы "кернә тартып", ҡолаҡ япрағын, күҙ ҡабағын ыуып, "йөрәк ултыртып" (түште һыйпап) имләгәндәр. Имләгәндә быумалы әрем, ҡалтыр сәйнәп төкөрөү ҙә ҡулланылған. Ҡымыҙ ҙа файҙаланылған.

**Өйәнәк ҡыҫыу.** Быума өйәнәгенә тағы өйәнәк ҡыҫыу ысулы ҡулланылған. Бының өсөн ҡойҡанан тотоп, кешенең баш көбөһөн оҙайтҡандар.

**Мәте тағыу.** Быуманы мәте тағып та имләгәндәр. Бының өсөн таҡыяға, ике күҙ араһына тура килтереп, бәләкәй генә түңәрәк тинлек кеүек таш йәки балсыҡ, йәки болан-ҡоралай мөгөҙөнән эшләнгән балдаҡ таҡҡандар.

**Мейе ултыртыу.** Быумалы кешене мейе ултыртыу ысулы менән дә имләгәндәр. Мейе ултыртҡандан һуң быума төш күрһә, ул уны һөйләргә тейеш. Сөнки быума аша Тәңре халыҡҡа хәбәр бирә, уны иҫкәртә, әшкәртә икән.

**Ҡурсаҡ ағыҙыу.** Быума булһа, ҡурсаҡты баштан әйләндереп, һыуға ағыҙғандар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

# МЕҢЙЕТӘРГӘ... кем етәр?

**Күптән түгел Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары менән беҙҙең редакция хеҙмәткәрҙәре "Айыҡ ауыл-2013" конкурсында ҡатнашыусы Иглин районы Үктәй ауыл биләмәһенә барып, урында башҡарылған матур традициялар, һөҙөмтәле эштәр, айыҡлыҡ хәрәкәте менән ҡыҙыҡһынды.**




Һәр урында оло йәнлелек күҙәтелгән был ауылда һәр кемдең тырышып, үҙ эше менән мәшғүл булыуын тамаша ҡылдыҡ. Ҡайһы бер йорттарҙа аҡ фонға ҡыҙыл һыҙыҡ менән арҡыры һыҙылған бокал һүрәте ҡағып ҡуйылған, йәғни, был йорттағылар эскелек менән шөғөлләнмәй, тигәнде аңлата булыр был билдә. Шулай уҡ ауылдың ялтырап ятҡан тигеҙ асфальт юлында ла айыҡлыҡ идеяһын хуплаған яҙыуҙарға осраныҡ. Ә күрше Үктәй ауылында беҙҙе бөтөнләй хайран иттеләр: ауылдың ҡап уртаһында балаларҙың, үҫмерҙәрҙең, хатта олпат-олпат ирҙәрҙең дә тиргә батып турникта һәм параллель брустарҙа төрлө әкәмәт күнекмәләр башҡарыуын күҙгә элдек...

Айыҡлыҡты пропагандалау буйынса эштәр өсөнсө йыл ауыл биләмәһе башлығы йөгөн тартҡан йәш егет Илһам Имаевтың бер үҙенең генә инициативаһы менән алып барылмай, ауыл йәштәре лә уға дәррәү ҡушылған. Ошо хаҡта ҡыуанып һөйләне биләмә башлығы: "Башта йөрөткән пландар күп инде ул, тик барыһын да ҡапыл ғына тормошҡа ашырып булмай. Ваҡыт етмәй, ҡул теймәй. Ярай әле, хәлле генә бер-нисә шәхси эшҡыуарыбыҙ бар, айыҡ хәрәкәт өсөн, тиһәк, уныһы-быныһы менән ярҙам итергә әҙер генә торалар. Әле бына бер көн ауыл йәштәре өсөн мәктәптән тыш тағы бер урынға спорт майҙансығы эшләргә ине, тип уйлап ҡуйғайным, ике-өс көн үтеүгә Фидан Сәйфетдинов атлы егет килеп, шундай уҡ идеяһы менән уртаҡлашты. Уға тағы бер егет - Минтимер Мөҙәрисов та ҡушылды, эшҡыуарҙарыбыҙ ҙа матди ярҙам бүлде. Ошо көндәрҙә был майҙансыҡты эшләп бөтөрөп, ауыл халҡын, уҡыусыларҙы йыйып, Өфөнән таныш турник оҫталарын саҡырып, шәп тамаша - бөтә донъя теле менән әйткәндә, Street work out майҙансығы асыу тантанаһын үткәрҙек. Унда килеүселәр турникта йәмғеһе 2013 тапҡыр тартылды: кемдер бер-икене, ә кемдер - күберәк".

Тағы бер ҡыҙыҡлы идеяһы менән уртаҡлашты ауыл биләмәһе башлығы. Эскелеккә кире мөнәсәбәт тәрбиәләү маҡсатында ауылдың сүплеге эргәһенә берәй мөйөш эшләтеп, уның башына "Эсеү урыны - ошонда" тигән яҙыу беркетергә лә уйлайҙар меңйетәрҙәр. "Сит илдәрҙә был практика күптән бар, һөҙөмтәле эшләй", - ти ул.

Күрше Үктәй ауылында йәшәүсе Фидан Сәйфетдинов менән дә әңгәмәләштек. Турник эшләп, шунда шөғөлләнеү теләге Фиданда әрменән ҡайтып, ундағы ғәҙәт буйынса, киске һауа алыштырырға сыҡҡан саҡта тыуған икән. РФ-ның Ҡораллы көстәрендә бурысын лайыҡлы үтәп ҡайтҡан егеттең кисен ауыл урамдарында тегендә төртөлөп, бында һуғылып йөрөгән ҡайһы бер тиҫтерҙәре өсөн йәне көйә. Тәүҙә егет иҫерек йәштәштәренең бәғзеләренә нотоҡ уҡып, уларҙы алама ғәҙәттән кире күндерергә лә тырышып ҡарай, ләкин һүҙҙәренең һөҙөмтәһе тойолмағас, балалар өсөн тип, Илһам Имаевҡа әлеге турник мөйөшөн ойоштороу идеяһын тәҡдим итергә, йәштәрҙе үҙ өлгөһөндә тәрбиәләргә ҡарар итә. "Мин үҙ тиҫтерҙәрем менән әллә ни аралашмайым, үҙемдән 2-3 йәшкә олораҡ ағайҙар менән йөрөйөм, улар алама ғәҙәттәрҙән алыҫыраҡ тора", - ти Фидан. Шулай итеп, армиянан ҡайтҡан егет кистәрен ошо мөйөштә физик күнекмәләр эшләргә, теләге булған олоһон да, йәшен дә үҙ-үҙенде һаҡлау ысулдарына ла өйрәтергә ниәт иткән. Маталар менән тәьмин итеүҙе ауыл хакимиәте башлығы үҙ өҫтөнә алған.

Күптән дин ҡанундары менән йәшәгән, 72 йәштә лә саңғыла йөрөгән, ауыл халҡын йыл да саңғы ярыштарына сәмләндергән, ошо традицияны йыл да тормошҡа ашырған Фаил Имаев та (ауыл биләмәһе башлығы Илһам Имаевтың атаһы) әңгәмә барышында: "Элек беҙҙе диндән айырып, моңһоҙ, динһеҙ, эскесе итеп тәрбиәләгәндәр. Ниңә шул дин алдараҡ рөхсәт ителмәне икән, тормошобоҙ айығыраҡ булыр ине", - тип ҡуйҙы. Дингә, айыҡлыҡҡа йөҙ борған балаларына, ауылдаштарына, йәштәргә ҡарап ҡыуана бөгөн аҡһаҡал...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башын боҙлоҡтар ҡаплаған тауҙарға сәйәхәтселәр экспедициялар ойоштороп, күмәкләп артыла. Яңғыҙҙар, төркөмдән тороп ҡалып аҙашҡандар тауҙағы һыуыҡтан, түбән атмосфера баҫымынан йә башҡа сәбәптән һәләк була… Халыҡты айыҡлыҡҡа әйҙәр өсөн дә бер-береһенә терәк булған ун, йөҙ, мең кешенең ҡатнашлығы талап ителә. Берәү етмәҫ үргә мең етер. Меңйетәрҙең миҫалына башҡа ауылдар ҙа ҡушылһын ине. Ул сағында республикабыҙҙа "Был йортта эсмәйҙәр" тигән билдә ҡуйылған йорттар ҙа артыр, ул йорттарҙа матур, тәүфиҡлы, аҡыллы балалар тыуыр. Ҡушылығыҙ, ауылдар!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ШАҢДАУ*

# САЛАУАТЛЫҠ ӨСӨН... кәрәкле һүҙҙе әйтеү ҙә етә



**Гәзиттең 38-се һанында районыбыҙҙың Йәнтеш ауылынан Салауат ҡусты Иҫкужиндың "Үҙе ҡолаған бала аяғына үҙе баҫып өйрәнһен" тигән әңгәмәһен уҡығас, уның тапҡыр һәм урынлы фекерҙәренә һоҡланыуымды белдерергә булдым. Бик ваҡытлы баҫылған был мәҡәлә.**

Хәҡиҡәт үҙ ваҡытында әйтелергә тейештер ҙә. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында республикабыҙ суверенлығын иғлан иткәндән һуң беҙгә элек мөмкин булмаған тарих биттәре асылып, рухыбыҙ уянып, тыуған телебеҙҙе өйрәнеү мөмкинлектәре киңәйеп, иркен тын алып ҡалғайныҡ. Хәҙер иһә, үҙәк тарафынан үткәрелгән власть вертикале өлгәшкән уңыштарыбыҙҙы юғалтыу ҡурҡынысы тыуҙырған бер мәлдә, ошо Салауат ҡусты кеүек хәҡиҡәтте сатнатып әйткәндәрҙең һүҙенә сарсай халҡыбыҙ. Ундай шәхестәрҙең һүҙе халыҡҡа ла, власть органдарына ла берҙәй үк кәрәк. "Тәбиғәт бушлыҡты яратмай" тип бик дөрөҫ әйтә автор. Ысынлап та, әгәр ҙә беҙ үҙ еребеҙҙе ташлап, Себерҙәргә йәки башҡа урындарға китһәк, ерҙәребеҙҙе башҡалар килеп үҙенең тыуған төйәгенә әйләндерәсәк. Минеңсә, Салауат ҡустының әйтергә теләгән иң төп фекере лә тап ошоға ҡайтып ҡала.

Салауат Иҫкужиндың кәрәкле был әңгәмәһен мин бер һүҙ менән "салауатлыҡ" тип билдәләр инем. Халҡыбыҙҙа салауатлыҡ батырлыҡ, тапҡырлыҡ, фиҙаҡәрлек тигән төшөнсәләр менән бер үк мәғәнәгә эйә. Бының өсөн күп тә кәрәкмәй: халҡың өсөн янһаң, хатта ваҡытында иң кәрәкле һүҙҙе әйтһәң, шул да етә. Быға Салауат батырыбыҙ үҙе миҫал була ала. Юлай улы Салауатты мәңгелеккә халҡы күңеленә алтын хәрефтәр менән яҙыр, халҡы йөрәгенә уйылдырыр өсөн ғүмеренең ике йылы ғына етә. Әгәр ҙә мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт милли хәрәкәтенә ҡушылмаған булһа, ниндәй генә камил шиғырҙар ижад иткән хәлдә лә, беҙ белгән Бабич булып балҡыр инеме икән?

**Рәшит НАСИРОВ,**
**крайҙы өйрәнеүсе.**
**Хәйбулла районы.**

*✓ Өфө ҡалаһының тарихын яҙыуҙы автор башҡорт халҡы тарихынан башлай. Был яҙма "Өфө ҡалаһында иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була", тип башлана.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Мәскәүҙә Рәсәй дәүләт тарихи музейының яҙма сығанаҡтары бүлегендә бер ҡулъяҙма һаҡлана. Унда: "Краткое описание губернского города Уфы с начала его построения и до сего 1808 года, собранное из разных древних летописей и достоверных описаний и приведенное в порядок 1808-го года. Уфа" тип яҙылған. Йөкмәткеһе яғынан XVI быуаттағы ваҡиғаларҙан алып XIX быуаттарға саҡлы тәбиғәт шарттарын теркәй барған яҙмаларға оҡшаған. Ҡулъяҙманың тышында 1808 йылға саҡлы тип яҙылһа ла, асылда, унда 1828 йылға тиклем булған мәғлүмәттәр ҙә бирелгән. 1811-1812 йылдарҙағы мәғлүмәттәр айырыуса ентекле һүрәтләнгән.**

# АВТОРЫ БИЛДӘҺЕҘ ҠУЛЪЯҘМА

## Өфөлә иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була



Өфө хаҡындағы был ҡулъяҙманың авторы билдәһеҙ. Беҙҙең фаразыбыҙ буйынса, ул Өфө кешеһе - урындағы Ребелинский тигән чиновниктарҙан булырға тейеш. Яҙмаларҙан күренеүенсә, белемле һәм байтаҡ мәғлүмәттәргә эйә был кеше. Ҡулъяҙмала В.Н.Татищевтың "Рәсәй тарихы"-на, П.И. Рычковтың "Ырымбур топографияһы"-на һәм "Ырымбур тарихы"на һылтанмалар бар. Боронғо хеҙмәттәрҙән Геродот, Страбон, Плиний, император Константин, көнсығыш авторҙарынан Абдулғази Баяғурхан телгә алына. Автор Ырымбур граждандар суды палатаһында һәм Өфө руханиҙар идараһында табылған архив документтарҙы ла файҙаланған.

Был ҡулъяҙмала Өфө ҡалаһы һәм Башҡортостан тарихы буйынса уникаль мәғлүмәттәр килтерелә. Төбәктең топографияһы, үҫемлек һәм хайуандар донъяһы, башҡорттар һәм Көньяҡ Уралға күсеп ултырған башҡа халыҡтар тарихы, Пугачевтың Өфөнө ҡамауҙа тотоу осоро, төбәктең иҡтисади үҫеше һәм бик күп башҡа төрлө хәл-әхүәлдәр хаҡында яҙылған. Яҙмаларҙа Өфө статусының бер нисә тапҡыр алмаштырылыуы ла телгә алына. XVI быуат аҙағында һәм XVII быуаттарҙа Өфө ҡалаһы - Башҡортостандың Европа өлөшөн биләп ятҡан Өфө өйәҙе менән идаралыҡ итеү үҙәге булған, 1715 йылдан (1728 йылдан тигән мәғлүмәттәр ҙә билдәле) шул уҡ территорияла ойошторолған Өфө провинцияһының административ үҙәгенә әйләнә. 1744 йылдан башлап Өфө провинцияһы яңы ойошторолған Ырымбур губернаһының бер өлөшө булып ҡала. 1781 йылда губерна ябайлаштырыла һәм Өфө губерна ҡалаһы статусы ала. 15 йылдан һуң 1796 йылда Ырымбур губернаһы яңынан тергеҙелә һәм 1802 йылға саҡлы губерна ҡалаһы булып Ырымбур иҫәпләнә. Шунан һуң 1802 йылдан алып 1866 йылға тиклем, 64 йыл буйы, Ырымбур губернаһының баш ҡалаһы Өфө була.

Өфө ҡалаһының тарихын яҙыуҙы автор башҡорт халҡы тарихынан башлай. Был яҙма "Өфө ҡалаһында иң тәүгеләрҙән булып йәшәүселәр башҡорттар була", тип башлана. Автор ҡулъяҙмала Петербург Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы П.И. Рычковтың хеҙмәтенә ентекле туҡталған. Ғалим Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә ҡушылғандан һуң да Себер хандары һәм ҡаҙаҡтарҙың яу менән йонсотоуҙары, шулай уҡ яһаҡты Ҡаҙан ҡалаһына ташыуҙың үтә лә ауырға төшөүе һәм шул сәбәпле башҡорт халҡының үҙ ерҙәрендә ҡала төҙөү өсөн рөхсәт һорауҙары хаҡында яҙа. Башҡорттарҙың бындай үтенесенә Мәскәү ризалыҡ менән яуап яҙа. Шулай итеп, Өфө ҡалаһы төҙөлә башлай. Өфөлә хеҙмәт итеү өсөн төрлө ҡалаларҙан кешеләр күсерелә.

Әйтергә кәрәк, ғалимдар араһында Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныу датаһы 1574 йылмы, әллә 1586-мы тигән бәхәс бара. Ҡулъяҙма авторы был датаны 1573 йыл тип атай. Быны ул ғалим Рычков сығанаҡтарына таянып яҙа. Әммә автор бер нәмәгә иғтибар итеп еткермәгән: Рычков үҙ хеҙмәтендә 1574 тигән йылды ла телгә ала. Крайҙы өйрәнеүсе башҡа ғалимдар ҙа, Е. Зябловский, А. Щекатов, Р. Игнатьев, Н. Гурвич, А. Усманов һәм башҡалар ҙа ошо уҡ фекер яҡлылар. Ә икенсе төркөм ғалимдар П. Пекарский, Н. Устюгов, Ә. Әсфәндийәров, Р. Бukановалар 1586 йыл яғындалар.

Коллектив рәүештә нәшер ителгән "История Уфы. Краткий очерк" хеҙмәте был бәхәстәрҙе хәл иткәндәй. Унда Өфө ҡалаһына 1574 йылда нигеҙ һалына, ә 1586 йылда ҡала статусы бирелә, тигән фекер нығытылған. Шулай итеп, баш ҡалабыҙға нигеҙ 1574 йылда һалына тип иҫәпләнә.

Өфө тарихы тураһындағы йылъяҙмала һүҙ артабан башҡорттарҙың йәшәйеше, ихтилалдары, ихтилал етәкселәре Сәйет батыр, Алдар тархан, Күсем батырҙар тураһында бара. "Өфө ҡалаһының урынлашыуы һәм биләгән майҙаны" тип аталған бүлектә П.И Рычковтың хеҙмәтенә һылтанмалар бар. Өфө ҡалаһы Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында, тауҙар уртаһында урынлашҡан. Ҡала урынлашҡан ерҙе уратып, 8 эреле-ваҡлы йылға аға, уның береһе Сутолка тип аталғаны, ҡаланың уртаһынан үтә. Сутолка йылғаһының түбәнге ағымында ҡаланың үҙәге менән көнсығыш өлөшөн тоташтырып тороусы күпер һалынған. Икенсе күпер Нуғай соҡоро буйлап үтеп, Шөгөр тауҙарында төйәкләнгән халыҡты үҙәк менән тоташтыра, тип яҙа ғалим.

Яҙмала шулай уҡ П.И. Рычковтың "Ырымбур тарихынан" тигән хеҙмәтенән алынып, Ҡыҙрас Муллаҡаев тигән башҡорттоң мәғлүмәттәре лә бирелә. "... Ҡаҙан ханлығы һәм башҡорттар Рәсәй тарафынан бойһондоролғанға тиклем үк хәҙерге Өфө урынында бик ҙур ҡала булған. Ул Ағиҙел йылғаһы буйлап үргә табан Өфө йылғаһына һәм йылға ярындағы Өфө тауҙарына тиклем ун саҡрым тирәһенә һуҙылған..."

Автор әлеге Өфө ҡалаһы урынлашҡан ерҙәрҙеңМең ырыуы башҡорттарыныҡы булыуын махсус рәүештә һыҙыҡ өҫтөнә ала. Рәсәй дәүләтенә ҡушылғанға тиклем Башҡортостан Нуғай ханлығына ҡарай. Рустар көнсығышҡа табан юл алғас, Ҡаҙан ҡалаһы ҡолатылғас, нуғайҙар Кубангә ҡаса башлай. Автор был ваҡиға тураһында шул тиклем ентекләп яҙа һәм хатта һөйләү йәнлерәк, ҡыҙығыраҡ төҫ алһын өсөн, нуғайҙарҙың башҡорт ерҙәренән ҡасыуы тураһында сығарылған легенданы килтерә. "...Ҡаланың боронғо кешеләре һөйләүенсә, Өфө ҡалаһы урынында ғәжәйеп ҙур имәнес йылан килеп сыҡҡан да үҙ юлында осраған берәүҙе үлем сигенә еткереп, сағып китә икән. Быны ишеткән хан үҙенең нуғайҙарын эйәртә лә табанын ялтырата. Дим йылғаһы буйында бер аҙ йәшәгәс, Ҡаҙан ҡалаһының бойһондоролоуы тураһында ишетеп, Кубангә табан һыпырта. Бынан һуң ағыулы йылан Өфө йылғаһы ярындағы тауға йәшеренә лә юҡ була һәм башҡаса бер кемгә лә зыян эшләмәй..."

1759 йылда ҙур фәжиғәгә килтергән янғын тураһында ла яҙыла . "Ҡаланы эс яҡлап һәм тыш яҡлап 651 йорт урынлашҡан, 6 сиркәү, 1 таш собор һәм ике монастырь бар. Ҡала 2 сажинға (4 метр 68 сантиметр) тиң - бейеклегендә бүрәнә диуар һәм ҡыуаҡлыҡтар менән уратылған. Ҡалаға инеү һәм сығыу өсөн 6 ҡапҡа бар. Ағиҙелгә яҡын ағас башня һәм кремль төҙөлгән, уның эсендә канцелярия урынлашҡан. Өфө йылғаһынан Ағиҙелгәсә ҡаланан байтаҡ алыҫлыҡта йырын йырылған һәм ҡаҙыҡтар менән нығытылған".

Артабан 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы, был һуғышты баҫтырыу өсөн ниндәй көстәр йәлеп ителеүе хаҡында ла тәфсирләп яҙыла. Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, Рәсәйҙә административ үҙгәрештәр башлана. Шул саҡта Өфө ҡалаһының статусы үҙгәртелә. Провинциялар менән идаралыҡ итеү үҙәге булған ҡала бик ҙур наместничество үҙәгенә әйләнә. Ҡала тарихында яңы тормош башлана.

Баш ҡалаһы Өфө булған край күп милләтлегә әйләнә, йәмғеһе 557 мең кеше йәшәй. Шуныһы иғтибарға лайыҡлы: административ-ойоштороу эштәре менән барлығы 545 кенә кеше етәкселек итә. Идара итеүҙәге был үҙгәреште батшабикә Екатерина II хуплай һәм үҙенең ҡәнәғәт булыуын белгертеп, генерал-губернатор Якобийға рәхмәт хаты яҙып ебәрә.

**Инга ГВОЗДИКОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Йорт хайуандарының, бигерәк тә **йылҡы** һәм **ҡуй ите** башҡорттарҙың ризығында төп урынды биләй. Башҡорттар малдарҙы ислам ҡушыуынса, билдәле ҡанундар буйынса һуйған. Хайуандарҙың боғаҙын ҡырҡҡас, ҡанын ерҙә алдан әҙерләнгән соҡорға ағыҙғандар. Һунарҙа аулаған кейек-ҡошто ла салғандар.

Ағиҙел йылғаһы бассейнында һәм Урал аръяғында **балыҡ** барлыҡ башҡорттарҙың ризығы булып тора. Йылдың йылы миҙгелендә, һыйырҙар һәм бейәләр һауылған саҡта, балыҡҡа ихтыяж бик тойолмай. Ҡышҡыһын, һөт ризыҡтары кәмегәс, урыны менән балыҡ (күлдәр һәм ҙур йылғалар булған урындарҙа) халыҡтың төп туҡланыу ризығы булып тора. Юҡҡа ғына башҡорттар, балыҡ тотоу урындарын ҡуртымға биргәндә, ҡышҡыһын унда үҙҙәре балыҡ тотоу хоҡуғын билдәләмәгән. Ризыҡ өсөн башҡорттар балыҡтың барлыҡ төрҙәрен дә бешереп ҡулланған, бик һирәк осраҡта ғына ҡурған.

**Ҡош-ҡорт** та башҡорттарҙың аҙыҡ-түлек рационында һуңғы урындарҙа тормай. Йорт ҡоштары, ҡаҙҙар һәм тауыҡтар булмаған ерҙәрҙә башҡорттар божор, сел, ҡор (оҙан, көртлөк), һуйыр, өйрәк, ҡаҙ аулаған.

Ризыҡҡа торна, аҡҡош, йыртҡыс ҡоштарҙан - бөркөт, ыласын, ҡоҙғон, ҡарсыға, ала ҡарға, ябалаҡ, өкө аулау тыйылған. Ни өсөн башҡорттар был ҡоштарҙы ризыҡ итеп ҡулланмағанын (тотем итеп ҡараумы йәки икенсе сәбәптәнме) асыҡлай алманым. Бары тик Ибн Фаҙландың торнаға башҡорттарҙың изге итеп ҡарауын билдәләүен, бөркөткә башҡорт фольклорында билдәле сифаттар биреләүен генә иҫкә төшөрәм.

Ҡош ите лә, балыҡ кеүек үк, бешерелеп ҡулланыла. Һунар кәсебендә тотолған ҡошто ҡырҙа шештә, усаҡ өҫтөнә ҡыя ҡаҙалған осло ҡаҙыҡҡа ҡуйып ҡурғандар. Бик йыш уны бөтөн килеш ҡыҙҙырғандар.

Йомортҡаларҙы ризыҡ итеп ҡулланыр алдынан һыуҙа йәки көлгә күмеп бешергәндәр.

Ҡырағай хайуандарҙан ризыҡҡа **ҡуяндар** һәм **ҡырағай кәзәләр** файҙаланылған. Йорт хайуандары барыһы ла ризыҡ итеп тотонолған. Бигерәк тә башҡорттар йылҡы һәм ҡуй итенә өҫтөнлөк биргән. Башҡорттарҙа итле аштар күп булмаған.

Күпселек халыҡ араһында иң таралған итле ризыҡ булып боламыҡ - шыйыҡ, ит өҫтөнә он һәм ҡорот һалынған аш; иң киң таралған билдәле ризыҡ - бишбармаҡ торған.

**Бишбармаҡ** (ҡуллама) XVIII быуат сәйәхәтселәре тарафынан ғына түгел, башҡорттарҙың көнкүрешен һуңғараҡ яҡтыртыусылар тарафынан да күп тапҡырҙар билдәләнә. Был ризыҡҡа иғтибар уның боронғо булыуына ғына түгел, ул ҡунаҡ килгәндә бешерелеүгә һәм ҡунаҡ һыйлауҙың билдәле бер йолаһына ла бәйле. "Бишбармаҡ" атамаһы, башҡа бик күп ризыҡтар кеүек үк, башҡорттар уны ҡалаҡ һәм сәнске менән түгел, ә биш бармаҡтары менән тотоп ашағанға шулай аталған. Ул һәр саҡ яңы ғына һуйылған һарыҡ йәки йылҡы итенән әҙерләнгән. Ит бер нисә сәғәт һуҙымында ҡаҙанда бешерелгән, һуңынан ваҡ ҡына киҫәктәргә туралған. Ит бешеп сыҡҡас, ҡаҙанға һалма һалынған.

✓ *Фәне булған халыҡтың ғына киләсәге бар. Әлеге мәлдә факультет фән буйынса университетта алдынғыларҙан һанала. Вузда иң күп гранттар беҙҙең факультетта, былар ҙа милләттең бәсен күтәрә торған факттар.*



**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты быйыл үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ошо уңайҙан факультет деканы, профессор Луиза Хәмзә ҡыҙы СӘМСИТОВА, педагогия фәндәре кандидаты, доцент, кафедра мөдире Сәлимә Айбулат ҡыҙы ТАҺИРОВА, филология фәндәре кандидаты, доцент, кафедра мөдире Ғәлимә Ғәлимйән ҡыҙы ҒӘЛИНА, филология фәндәре кандидаты, доцент Зәки Арыҫлан улы ӘЛИБАЕВты ҡорға саҡырҙыҡ. Республиканың уҡытыусылар әҙерләүсе берҙән-бер педагогик вузының иң яҡшы факультеттарының береһе тигән абруйҙы төшөрмәү, улай ғына ла түгел, сит илдәрҙә башҡортто танытып, туған телде, милли әҙәбиәтте, мәҙәниәтте үҫтереү өсөн бар тырышлыҡты һалып эшләү өсөн ниндәй булырға кәрәк һуң? Әңгәмәселәребеҙ ошо һәм башҡорт телен уҡытыуҙың бөгөнгө торошо тураһындағы һорауҙарға яуап эҙләйәсәк.**

**▸ БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетына 20 йыл тигәнгә ышанғы ла килмәй, сөнки уның бөгөнгө милли мәғарифта тотҡан урынын баһалаһаң, быуатҡа яҡын тарихы бар һымаҡ. Тимәк, факультет шулай уҡ республика суверенитеты емеше?**

**З. ӘЛИБАЕВ:** Суверенитет яулағанға тиклем республика вуздарында дөйөм филологик факультеттарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлектәре генә була торғайны, айырым факультет булараҡ улар үткән быуаттың 90 йылдары башында ғына асылды. БДПУ-ла

систенттар. Әхмәр Аҙнабаев, Луиза Сәмситова, Миңһылыу Усманова, Гөлнур Бохарова, рус теле, уларҙы уҡытыу методикаһы буйынса эшләгән Рәйсә Дәүләтбаева, Рәшит Әлмөхәмәтовтарҙы шундайҙар рәтенә индерер инем. Ғөмүмән, уҡытыусыларыбыҙҙың һәр береһе тураһында әллә күпме һөйләргә була. Факультетта йәштәрҙе фәнгә ылыҡтырыу буйынса күп эштәр башҡарыла. Быйыл да аспирантураға уҡырға инеүсе йәштәребеҙ беҙҙә эш башланы, шулай коллективтың йәшәреүе тураһында хәстәрлек күрелә. Быйылғы уҡыу йылында башҡорт-төрөк төркөмө тер-

нә сығыу теләге менән янабыҙ. Ҡасандыр Зәки Вәлиди, Мифтахетдин Аҡмуллалар төрки донъяһын үҙенә ҡаратып тотҡан икән - бөгөн дә беҙ шул кимәлдән төшөргә тейеш түгелбеҙ. Ҡасандыр бөтөн төрки халыҡтары башҡорттоң артынан эйәргән икән - беҙ ҙә ул юғарылыҡҡа етә, ҡәрҙәштәргә һаман да өлгө булып тора алабыҙ, быныӊ өсөн беҙҙә мөмкинлектәр бар.

Бөгөн факультет тураһында, уҡыу буйынса булһынмы, фән буйынсамы, спорт, тәрбиәүи эштәр буйынса ла тик ыңғай һүҙҙәр генә әйтеп була. Хәҙер шул тиклем һәләтле, заманса фекерләгән йәштәр уҡырға

сығарылыш студенты Рәмил Ғәлимов көрәш буйынса өс тапҡыр Рәсәй чемпионы булды. Ҡул көрәше - армрестлинг буйынса Рәсәй чемпионы Гөлназ Әхмәтшина шулай уҡ беҙҙең факультеттың данын арттыра. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурсында ҡатнашыусы мәктәп уҡыусылары араһынан лидерҙар хәҙер барыһы ла беҙҙең студенттар.

**▸ Факультетта ТӨРКСОЙ кафедраһын асыу ул башҡа төрки халыҡтарының башҡорт халҡы менән дә ҡыҙыҡһыныуы тураһында һөйләйҙер. Һәр хәлдә башҡорт филологияһы факультеты үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәмәй икәнен беләбеҙ, сит илдәргә сығыу, сит ил юғары уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итеү бөгөн ниндәй кимәлдә?**

**Л. СӘМСИТОВА:** Ысынлап та, сит илдәр менән бик тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ, бигерәк тә Ҡаҙағстан, Төркиә менән яҡшы бәйләнештәбеҙ, был илдәрҙең күп вуздары менән килешеүҙәр төҙөлгән, шулай уҡ стажировкалар үтеү яйға һа-

ректоры, педагогия фәндәре докторы Раил Мирвай улы Әсәҙуллинға оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, сөнки уның ризалығы менән беҙҙә күп эштәр эшләнә. Ниндәй генә тәҡдим менән инһәк тә, кире ҡаҡмай. Тимәк, факультетҡа етәкселек тә ышана.

**З.ӘЛИБАЕВ:** Республика буйынса филология факультеттарында урындар һаны йылдан-йыл кәмегән ваҡытта, беҙ быйылғы уҡыу йылында факультетҡа 90 студент ҡабул иттек. Бөтөн факультеттарҙа ла башҡорт теле уҡытыла, башҡа һөнәр үҙләштереүсе студенттар ҙа был предметтан да зачет, имтихандар бирә.

**Ғ. ҒӘЛИНА:** Унан һуң беҙҙең университет республикала ШОС составындағы берҙән-бер вуз. Беҙҙең студенттар төп вуздың һәм тағы ла өҫтәмә белем биреү илдәренең сертификатын алып сығасаҡ. Донъя кимәлендәге юғары уҡыу йорто булып, бәләкәй маҡсаттар менән йәшәй алмайбыҙ - ошоно барыбыҙ ҙа яҡшы төшөнә.

**С. ТАҺИРОВА:** Педагогик вуздың, беренсе ҡарамаҡҡа, төп бурысы уҡытыусылар

# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘГЕ

## оло маҡсаттар менән

электән ныҡлы база булғанлыҡтан, уның тәүге деканы Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисамитдинова, бөтөн көстәрҙе туплап, факультет ойоштора. Быға тиклем эшләп килгән рус-башҡорт бүлегенән айырмалы рәүештә республика мәктәптәренә уҡытыусылар әҙерләү өсөн генә түгел, башта уҡ донъя кимәленә сығыу тигән маҡсаттар ҡуйып башлап ебәрә үҙенең эшмәкәрлеген факультет. Уҡытыу-тәрбиә процесына әҙерлекле белгестәр ылыҡтырыла. Бер нисә йыл үткәс, Төркиәнән утыҙлаған студентты әҙерлек курсына алып, факультет нигеҙендә башҡорт-төрөк төркөмдәре асып, стажировкалар ойоштороla. Был да үҙенә күрә ҙур яңылыҡ була. Һәр хәлдә башҡорт филологияһы факультеты тәүге аҙымдарынан уҡ киләсәккә маҡсатлы пландар ҡора, шуға ла ул уҡыу йортоноң йөҙөк ҡашын билдәләй торған факультет булырлыҡ итеп нигеҙләнгән. Нигеҙҙең таяуҙары ныҡ булғас, ул артабан да ныҡлы торасаҡ, университет башҡорт халҡының бөйөк мәғрифәтсеһе Аҡмулла исемен йөрөтә, ә башҡорт филологияһы факультеты бөгөн дә уның брендын булдырып тороусы факультеттарҙың береһе.

**С. ТАҺИРОВА:** Бөгөн дә факультет үҙенең уҡытыусылары, төрки донъяһында дан алған ғалимдары менән ғорурлана ала. Мин етәкләгән башҡорт теле һәм уның уҡытыу-методика кафедраһы иң ҙуры иҫәпләнә, беҙҙә 26 уҡытыусы эшләй, уларҙың 6-һы - профессор, 11-е - доцент, ҡалғандары өлкән уҡытыусы, ас-

геҙелде. Быға тиклем ғәрәп төркөмө эшләне. Башҡорт-инглиз төркөмөнә ете телде һыу кеүек эскән, Иорданияла уҡып, Англияла стажировкала булып ҡайтҡан көслө белгесебеҙ Аэлита Миниянова, төрөк теле буйынса, рус, төрөк, инглиз телдәрен сағыштырып өйрәнеп, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған Мусап Айчичекты эшкә алдыҡ.

**Ғ. ҒӘЛИНА:** Мин етәкләгән башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһында 2 профессор, 6 доцент һәм 1 ассистент эшләй, уларҙы ла мин донъя кимәлендә ҙур эштәр башҡарыусылар рәтенә индерер инем. Кафедра сиктәрендә этнопедагогика һәм фольклор үҙәге эшләп килә, уны профессор Әхмәт Сөләймәнов етәкләй. Гранттар яулап, төрлө йүнәлештә әүҙем генә эштәр башҡарабыҙ. Шулай уҡ кафедра нигеҙендә этнофольклористика буйынса магистратура ла асылды.

**Л. СӘМСИТОВА:** Факультеттың тарихы тураһында, ысынлап та, күп һөйләргә булыр ине. Бөгөнгө көндә иһә беҙ ошо эшмәкәрлекте дауам итеү һәм ошо кимәлдән төшмәү өсөн бар көсөбөҙҙө һалабыҙ. Әлеге ваҡытта башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы, башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраларынан тыш, өсөнсө кафедра - ТӨРКСОЙ кафедраһы. Барыбыҙҙың да маҡсаттары бер: тәү сиратта телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы, халыҡ ижадын һаҡлау һәм уны киләсәк быуынға еткереү, пропагандалау торһа, икенсенән, вузға, республикаға ғына түгел, ә донъя кимәлендә

килә, береһенән-береһе уҙҙырып йырлай, бейей, шиғыр һөйләй, ҡурайҙа, флейтала уйнай. Йыл һайын Ижевск ҡалаһында Рәсәй халыҡтарының телдәре һәм әҙәбиәте буйынса бөтөн Рәсәй олимпиадаһы үтә, былтыр беҙҙең команда беренсе урын яулап ҡайтты. Ғөмүмән, фәнни эш юғары кимәлгә ҡуйылған. Факультетта һәр уҡытыусының проблемалы төркөмө бар. Кемдер, быны яңылыш аңлап, насар уҡыған студенттар менән шөғөлләнәләр икән унда, тип уйлар. Әммә был - киреһенсә, фән менән шөғөлләнгән иң шәп студенттарҙың төркөмө. Һәр кем үҙе өйрәнгән йүнәлеш буйынса шөғөлләнә, мәҡәләләр яҙа. Һөҙөмтәлә, беҙ төрлө кимәлдәге конференцияларҙа күпләп ҡатнашабыҙ. Ғөмүмән, фәнгә ылыҡтырыу маҡсатында ла эшләнә был, сөнки фәне булған халыҡтың ғына киләсәге бар. Әлеге мәлдә факультет фән буйынса университетта алдынғыларҙан һанала. Вузда иң күп гранттар беҙҙең факультетта, былар ҙа милләттең йөҙөн билдәләй, бәҫен күтәрә торған факттар.

Луиза Закирйәнова тигән студентыбыҙ, Краснодар крайына барып, матурлыҡ конкурсында икенсе урын алды, Айгөл Вәлиева Ставрополдә сығыш яһаны. Нурсилә Фәхретдинова, Зилиә Әбүлғәтиналар Башҡортостанда үткән "Һылыуҡай" конкурсында былтыр III урын алды. Ни өсөн беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары матурлыҡ конкурстарында ҡатнашмаҫҡа тейеш әле, матурлыҡ та үҙенә күрә дан. Спортҡа килгәндә, былтырғы

лынған. Мәҫәлән, былтыр ғына студентыбыҙ Илдус Ҡаһарманов өс ай Анкараның Ғази университетында стажировкала булып, бөтөн төрки донъяһы йәш шағирҙары араһында лауреат булып ҡайтты. Йәш шағирыбыҙ бөгөнгө көндә ҡала округы хакимиәтендә уңышлы эшләп йөрөй. Унан һуң Ҡарлуғас Ғөбәйҙуллина, Рида Тимершәйәхова тигән ҡыҙҙарыбыҙ Төркиәлә бер ай стажировкала булып ҡайтты, Рида Мәскәүҙә бөтөн Рәсәй олимпиадаһында төрөк теленән өс йөҙ кеше араһынан өсөнсө урынды яуланы. Былар барыһы ла - уҡытыусыларыбыҙҙың эш һөҙөмтәһе.

Донъя кимәлендә берҙәнбер ТӨРКСОЙ кафедраһы беҙҙең Башҡортостанда, беҙҙең факультетта икән - ТӨРКСОЙ составындағы башҡа илдәр менән дә бәйләнеш булдырыу, шул республикалар менән тығыҙ аралашыу, үҙебеҙҙе күрһәтеү, уларҙы күреү һәм төрки донъяһында башҡорт халҡының үҙенең урыны бар икәнен билдәләү ҙә беҙҙең маҡсатыбыҙ.

**З. ӘЛИБАЕВ:** Сит телдәр тигәндәй факультетта Европа телдәре төркөмөнә ҡараған телдәр ҙә өйрәнелә, мәҫәлән, башҡорт-инглиз бүлеге бар. Был бүлектә белем алған студенттарҙың йәйге каникулдар мәлендә Америкаға барып, телде тағы ла камилыраҡ итеп үҙләштереп ҡайтыу мөмкинлеге бар, быйыл шулай уҡ Ҡытайға ла барып ҡайттылар.

**Л. СӘМСИТОВА:** Форсаттан файҙаланып, БДПУ-ның

әҙерләү кеүек. Әммә беҙҙең эшмәкәрлек быныӊ менән сикләнмәй. Факультет һәм дөйөм белем биреү, махсус белем биреү учреждениелары араһында шундай ныҡлы бәйләнеш булдырылған. Белорет районы Абҙаҡ мәктәбендә, Дыуан республика лицей-интернатында, Салауат ҡалаһының 25-се башҡорт мәктәбе, Өфө ҡалаһының 112-се мәктәбе, Дәүләкән ҡалаһының 3-сө башҡорт гимназияһында беҙҙең тәжрибә майҙансыҡтары эшләп килә. Шулай уҡ һәр кафедраның филиал кафедралары бар, мәҫәлән, башҡорт теле һәм уны уҡытыу кафедраһының филиалы булып М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы тора. Улар менән бер нисә йыл эшләйбеҙ, дөйөм дәреслектәр әҙерләнә, методика яҙыла, уҡытыусыларға методик яҡтан ярҙам итәбеҙ, улар, үҙ сиратында, беҙҙе методик яҡтан байыта.

**▸ Бөгөн башҡа донъяуи процестар менән бергә белем биреү өлкәһе лә глобаллäшеүгә дусар ителә. Әлбиттә, техник йыһазландырыу, сит илдәрҙең вуздары менән бәйләнештәр булдырыу яҡшы, шул уҡ ваҡытта студенттарығыҙҙың үҙ милләтен, телен яратыусы, рухлы икәнен дә ишетеп түгел, күреп беләбеҙ. Был йәһәттән дә ниндәйҙер маҡсатлы эш алып бараһығыҙмы?**

**З. ӘЛИБАЕВ:** Бөтөн был эшмәкәрлек шуға йүнәлтелгән: беренсе сентябрҙә уҡырға килгән беренсе курс студент-

***✓ Беҙгә өс төшөнсәгә иғтибар итергә кәрәк: беренсенән, бахырлыҡты алып ташлау, икенсенән, битарафлыҡ булырға тейеш түгел, өсөнсөнән, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәү.***

# УҠЫУ ЙОРТО...
## генә йәшәй ала

тарына әйтеп ҡуябыҙ - беҙ үҙ еребеҙҙең, үҙ республикабыҙҙың хужаһы. Хужа ҡиәфәте менән дә, белеме менән дә башҡаларға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ булырға тейеш. Факультетта беренсе урынға уҡыу ҡуйылһа ла, фән һәм йәмәғәт эштәрендә лә студент әүҙем ҡатнашырға бурыслы. Башта үҙең талап итеп йөрөтһәң, аҙаҡтан улар үҙҙәре лә асылып китә, хатта үҙең хайран булып, һоҡланып ҡарап тораһың. Бөгөн беҙҙә һәр уҡытыусы студенттар менән бергәләп етмешәр доклад әҙерләй. Студент бер тапҡыр ғилми хеҙмәт яҙып, үҙен һынап ҡарағандан һуң, тағы ла ҡыҙыҡһынып китә. Конференцияларҙа ҡатнаша, үҙенә ышанысы арта. Былар барыһы ла фәнни мәктәпте барлыҡҡа килтерә. Бөгөнгө күҙлектән генә түгел, телдең, әҙәбиәттең тарихын сағыштырып өйрәнеү ҙә шәхесте тәрбиәләй. Аҙаҡ улар, ҡулына диплом алып, ҡайҙа ғына эшләргә бармаһын, ул үҙен хужа итеп тояса́ҡ.



Шундай заманда йәшәйбеҙ, бөгөн һин космополит булһаң, йәғни ни тиклем үҙ ереңә, үҙ илеңә битараф булһаң, шул тиклем яҡшыраҡ тигән фекер алға һөрөлә. Диндең төрлө йүнәлештәре, секталар барлыҡҡа килгән мәлдә беҙҙең студенттар белә: улар ниндәй диндә, ниндәй ерҙә, халҡының тарихы ниндәй, ниндәй батырҙары бар һ.б. Былар барыһы ла ябай ғына нәмәләрҙән, әйтәйек, үҙеңдең тыуған районыңдың тарихын белеүҙән башлана. Аҡмулла көндәрен үткәргән ваҡытта бер уҡыусы Аҡмулланың Учалы районы Муллаҡай ауылында өйләнеп, шунда бер ай буйына кейәү булып, ҡунаҡлап ятыуы тураһында яҙған ғилми хеҙмәтен ебәргәйне. Уның кәләше Аҡмулла менән Ҡаҙағстанға китергә теләмәй, ауылында тороп ҡалған. Был хәл ысынлап та булған. Уҡыусылар ошондай мәғлүмәттәрҙе эҙләй, таба икән - был бик яҡшы күренеш һәм был ябай ғына олимпиада ла киләсәк быуынды тәрбиәләү эшенә ҙур өлөш индерә. Беҙ Аҡмулла исемен йөрөтөүсе вуз, беҙ Аҡмулла менән һулайбыҙ, Аҡмулла менән йәшәйбеҙ, Аҡмулла менән барбыҙ, Аҡмулла менән буласаҡбыҙ. Быны студенттар ҙа тойһон өсөн, уҡыу алдынғыларын Аҡмулланың тыуған еренә алып барабыҙ. Шул тиклем рухланып, ҡанатланып ҡайталар унан. Глобалләшеү заманында һин бөтөн планетаның кешеһе тигән уй көсләп тағылған мәлдә тамырҙарыңды онотмай, үҙ ереңдең аяғында ныҡлы баҫып торған кешеһе, ҙур шәхес булғандан һуң ғына донъя кимәлендә фекер йөрөтә алаһың. Хоҙай тарафынан бирелгән был ер башҡорттоң исеме менән аталған икән - бында хужа берәү генә. Әммә шул хужа күкрәк һуғып маҡтанырҙан алда, үҙе үҙ ерендә ныҡлы баҫып торорға тейеш. Башҡортостанға хатта һөйәктәре лә әйләнеп ҡайтмаған Салауатты, Зәки Вәлидиҙе, шул уҡ Бабичты гел иҫкә алыуыбыҙҙың сәбәбе ниҙә һуң? Сөнки улар ситтә булған хәлдә лә ошо ергә ныҡ баҫып торғандары өсөн уларҙың исеме лә, есеме лә, фәне лә, әҙәбиәте лә кире әйләнеп ҡайта. Һәр хәлдә ошо рухты һалырға тырышабыҙ студенттарыбыҙ күңеленә, уларҙың уҡыуҙарын тамамлағас та юлдарында яңылышмаясаҡтарына иманым камил.

**Л. СӘМСИТОВА:** Әлбиттә, рух төшөнсәһен балаға ғаилә һалырға тейеш. Әммә был ни сәбәптәндер күҙ уңынан ысҡынған икән - быны уҡытыусы ла тәрбиәләй ала, сөнки баланың тормошонда уҡытыусының роле ҙур. Беҙгә өс төшөнсәгә иғтибар итергә кәрәк: беренсенән, бахырлыҡты алып ташлау, икенсенән, битарафлыҡ булырға тейеш түгел, өсөнсөнән, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәү. Ошо өс төп төшөнсәгә иғтибар итһәк, беҙҙең бөтәһе лә яҡшы буласаҡ. Ниндәй генә шарттар, ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, бер ваҡытта ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйбеҙ, тип студенттарыбыҙҙы тәрбиәләйбеҙ һәм шул маҡсаттан сығып эш итәбеҙ. Студенттар, бер-береңә битараф булмау, иманлы, намыҫлы, рухлы булырға кәрәклекте аңлап, 5-се курсҡа шәп шәхес булып үҫешә. Университетта иң дуҫ факультет - башҡорт филологияһы факультеты тигән фекер таралған. Уҡытыусынан күп нәмә тора. Студенттар, уҡып бөтөп, уҡытыусы булып эшләй башлағас, ошо осҡондо үҙенең уҡыусыларына һаласаҡ.

**З. ӘЛИБАЕВ:** Бөгөн беҙ бер нәмәне онотоп китәбеҙ: йәмғиәттә беҙгә ыңғай ғына иҫеп торған елдәр юҡ, киреһенсә, күберәк ул беҙгә ҡаршы иҫә. Ғөмүмән, халыҡ тарихын алып ҡарағанда ла, халҡыбыҙ бер ваҡытта ла ҡул ҡаушырып, алма беш - ауыҙыма төш, тип ятмаған. Беҙ - тәрбиәселәр, уҡытыусылар, беҙ бөгөн бөтөн булған рухи байлыҡтарыбыҙҙы киләсәк быуынға тапшырып ҡалдырырға тейешле кешеләр. Хатта былай ғына ла түгел, беҙ студенттарҙы үҙебеҙгә тиң күреп, бергә эшләргә тейешбеҙ. Фәнни мәҡәлә йәки диплом яҙған студенттың фекерҙәре һинеке менән тура килмәгәндә лә, уны ҡабул итергә бурыслыбыҙ, сөнки һәр фекер, һәр ҡараштың йәшәргә хоҡуғы бар. Бер ҡасан да студенттарҙы тыймайбыҙ, киреһенсә, ҡараштарын үҫтереп ебәреү өсөн мөмкин булған тиклем булышлыҡ итәбеҙ. Фәрхәт Вәлиев тигән студентыбыҙ милли эсемлегебеҙ буҙа тураһында ҙур презентациялар эшләп, Рәсәй буйынса конференцияларҙа урын яулап йөрөнө. Башҡорт ҡурсаҡтары темаһы булһынмы, студенттарҙың башҡа инициативаһы булһынмы, улар беҙҙең факультет етәкселеге тарафынан яҡлау табасаҡ. Һәр студенттың мотлаҡ ниндәйҙер һәләте, нимәгәлер барымы була. Бары тик уларҙы бар нәмәгә ижади ҡарарға өйрәтергә кәрәк. Эшегеҙгә ижади ҡараһағыҙ, дәресегеҙ ҙә йырлап үтәсәк, йәшәүе лә еңелерәк буласаҡ, тибеҙ. Уҡытыусы булып эшләп йөрөгән элекке студенттарыбыҙҙы алып ҡараһаҡ, мәҫәлән, Әлфиә Һатлыҡова үҙенең думбыраһы менән Башҡортостанды ғына түгел, сит илдәрҙе лә таң ҡалдырған. Һаман үҙенең беренсе алған һөнәренә тоғро ҡалып, мәктәптә уҡытыусы булып эшләй, ниндәй генә сара үткәрһәк тә, Әлфиәне саҡырабыҙ, бер ҡасан да кире ҡаҡмай. Башҡорт һүҙ сәнғәте, ҡасандыр 18-19 быуатта үҙенең иң көслө осорон кисергән сәсәнлек мәктәбен студенттарыбыҙ бөгөн дә йәшәтә, дауам итә һәм быны туҡтатып та булмаясаҡ. Уҡып бөтәләр, ҡайҙалыр мәктәптәрҙә эшләп йөрөйҙәр, күңелдәрендә Аҡмулла рухы һаман дөрләй. Уға эйәреп, үҙҙәре лә текстар яҙа. Йәштәрҙә ижади потенциал бар, уларҙы уятырға, күрергә һәм үҫтерә белергә генә кәрәк. Әгәр ҙә был эш беҙҙең уҡыу йортонда, беҙҙең факультетта эшләнмәһә, гонаһ булыр ине. Был маҡтаныу ҙа түгел, беҙ ана шул һәләттәрҙе күреүсе уҡытыусылар ғына.

▸ **Бөгөн республикабыҙҙа дәүләт теле статусына эйә булған туған телебеҙ беҙҙең ҡурсыуға мохтаж, йәғни һәр уҡыу йылы башланған һайын мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре сәғәттәре һаны өсөн көрәш бара. Шул уҡ ваҡытта, БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты йылдан-йыл студенттар һанын күбәйтә, һеҙҙә башҡа факультеттар ҙа башҡорт телен уҡый. Телебеҙҙе уҡытырға мөмкинлек юҡ, тип зарланып һәм бында яңы белем биреү стандарттарын "ғәйепләп", ҡул ҡаушырып ултырыусыларға үҙ тәжрибәгеҙҙән сығып, ниндәй кәңәштәр бирергә булыр ине?**

**З. ӘЛИБАЕВ:** Үҙгәрештәрҙе ҡабул итеүҙән башҡа сарабыҙ юҡ, сөнки улар күп осраҡта беҙҙән генә тормай. Әммә уларҙың барыһын да кире тойғолар менән ҡабул итергә кәрәкмәй. Был насар, тип әйткәндән һуң, һин үҙең яҡшырағын күрһәтергә тейешһең. Беҙҙең университет ректоры Раил Мирвай улы Әсәҙуллин да талапты шулай ҡуя: тәҡдимдәр индерегеҙ, үҙегеҙҙе күрһәтегеҙ, ҡалғанын беҙ хәл итербеҙ. Шул уҡ ике структуралы белем биреү - бакалавр һәм магистрҙар әҙерләүҙе генә алайыҡ. Башҡалар был яңылыҡты хупламаған саҡта беҙ уны ентекләп өйрәнеп, үҙебеҙ өсөн уның ыңғай яҡтарын астыҡ. Төбәк компонентын да һуңғы йылдарҙа телебеҙҙән төшөрмәй һөйләйбеҙ. Әгәр ҙә йәмғиәттә башҡорт телен өйрәнеү беҙгә кәрәк түгел, тип әйтәләр икән - был турала бер туҡтауһыҙ һөйләп ултырыуҙан хәл үҙгәрмәйәсәк. Шул уҡ ваҡытта ошо шарттарҙа БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты 90 кешене уҡырға ҡабул итә икән - тимәк, беҙ башҡаларға тел өйрәнеүҙең кәрәклеген күрһәтә алабыҙ. Уҡып сыҡҡан студенттарыбыҙҙың мотлаҡ эшкә урынлашыуын да күҙәтәбеҙ, ниндәйҙер мәктәпкә башҡорт теле уҡытыусыһы кәрәк булһа, үҙебеҙ ҙә тәҡдим итәбеҙ, директор беҙҙең студентты эшкә алып, һис тә яңылышмаҫын да белә. Башҡорт теле бер телдән дә кәм түгел. Тик кешенең аңына был телде өйрәнмәһәм дә була тигән хата ҡараш һеңдерелгән. Быны ошо психологик ҡаршылыҡтарҙы алып ташларға кәрәк.

**Л. СӘМСИТОВА:** Башҡорт теленең дәүләт теле икәнен онотмаһаң, бер ҡаршылыҡтар ҙа юҡ. Бар бәләләр закондарҙы белмәүҙән килеп сыға. Әлеге лә баяғы бахырлыҡ һәм битарафлыҡ булмаһа, тел өйрәтеү мәсьәләһендә барыһы ла ыңғай хәл ителер ине.

**С. ТАҺИРОВА:** Ысынлап та, һәр нәмәнең ыңғай яғы була. Мәҫәлән, яңы мәғариф стандарттары буйынса һәр уҡыусыға индивидуаль ҡараш булдырыу тураһында һүҙ алып барабыҙ икән, дәрестән һуңғы эшмәкәрлеккә сәғәттәр һаны арта икән - барыһы ла насар түгел бит. Яңылыҡтарҙың бына ошондай өҫтөнлөктәрен күрә белергә кәрәк. Дидактик, методик принциптар үҙгәрә, улар шәхси мөнәсәбәттәр булдырыу, үҙ баһаңды күтәреүгә, демократик ҡараш тәрбиәләүгә йүнәлтелә икән - дәрестәрҙә ошолар өҫтөндә эшләп, халҡыбыҙҙа ошо һыҙаттарҙы арттыра алабыҙ. Ауыр, уф, тип әйтеүе еңел ул, законды бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ, әммә үҙебеҙгә файҙалы яғын ҡарарға һәм шуны үҙебеҙгә буйһондорорға тейешбеҙ.

**З. ӘЛИБАЕВ:** Ошо яңы мәғариф стандарттарын тормошҡа ашырыу өсөн беҙҙең уҡытыусылар Мәскәү, Санкт-Петербург, Швецияла стажировкалар үтте, тимәк, үҙҙәрен тағы ла камиллаштыра алды. Ә тел уҡытыуға килгәндә инде, мәктәптәрҙә яңы федераль белем биреү стандарттары буйынса уҡыу планын мәптәп директорҙары һайлай. Шул мәктәптә уҡытып йөрөгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы директорға инеп, закондың үтәлешен талап итергә бурыслы, әммә бының өсөн ул үҙенең эшен күрһәткән, ихтирамлы уҡытыусы булырға, әлеге лә баяғы, үҙенең аяғында ныҡлы баҫып торорға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XXI быуатты гуманлылыҡ һәм гуманитар фәндәр быуаты тиһәләр ҙә, бөгөнгө нанотехнологиялар өҫтөн ҡуйылған мәлдә гуманитар өлкәне етди фән итеп ҡабул итмәүселәр ҙә етерлек. Ошондай шарттарҙа бер нәмәгә иғтибар итмәйенсә, төрлө йүнәлештәрҙә берҙәй камил үҫешкән факультет, уның уҡытыусылары, студенттарының уңыштарының сере лә, көсө лә - йөрәктәрендә халҡына булған һөйөүҙә һәм рухталыр, моғайын.**

**Ә факультеттың һәм шулай уҡ ТӨРКСОЙ-ҙың егерме йыллыҡ юбилейына килгәндә, был саралар 24-26 октябрҙә үтәсәк. Тәүге көндә Өфөлә билдәле ғалимдар ҡатнашлығындағы халыҡ-ара кимәлдәге ғилми-ғәмәли концеренция, Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһында байрам тамашаһы, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклен ҡарау көтөлһә, 25 октябрь көнө ТӨРКСОЙ-ҙың 20 йыллығына арналған түңәрәк ҡор уҙғарыла.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

✓ Килмешәктән уңды лаһа Башҡортостан,
Мәрхәмәтлек фонды лаһа Башҡортостан,
Кемгә кәрәк, күпме кәрәк, ал, алығыҙ,
Йорт һалығыҙ, өйләнегеҙ, балалағыҙ.

Әммә ләкин бер нәмәне онотмағыҙ,
Ҡаныбыҙҙы беҙҙең берүк болғатмағыҙ.
Ошо тупраҡ беҙҙең ҡанға һуғарылған,
Аллаһ тағы ҡарап тора юғарынан...



ШИҒРИ ДИАЛОГ

# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ ТЫУҒАН МӘҢГЕ КӨРӘШЕРГӘ,

## Тик тыумаған тыуған ерен өләшергә!

**Республикабыҙҙың төп байрамы алдынан шағирҙар Дамир Шәрәфетдинов менән Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай тағы шиғри диалог ойошторҙо. Үткән йылдарҙағы әйтештәрен дә иҫкә төшөрөп алды улар, ундағы юлдарға яңыларын да өҫтәне.**



**Әхмәр:**
Иҫеңдәме, дуҫҡай, икәү әйтешкәйнек,
Уйҙарыбыҙ бер тәңгәлдә киҫешкәйне.
Шунда үткән быуат менән хушлашҡайнык,
Яңыһына ҡул бирешеп, дуҫлашҡайныҡ.

Талап итә беҙҙең һүҙҙе тағы заман,
Үҙ хакимын ҡылмаҡ була ялған, яман…
Әллә ҡайҙан килеп сыҡты "ҡара пиар" -
Аты-юлы булмаған һис ҡара буяу.

Йөҙөбөҙҙө ул ҡараға буямаҡсы,
Төйәгебеҙ - Уралтауҙы урламаҡсы.
Баш ҡалҡыта ҡәһҡәһәләр, дейеү-пәрей,
Көпә-көндөҙ урмандарҙа бүре йөрөй.

Үҙебеҙҙе йотмаҡ булып аждаһалар,
Йәнебеҙҙә соҡсоналар, ажғыралар.
Уларҙы бит Урал батыр ҡыйраткайны,
Үҙебеҙҙе тауҙар менән ураткайны.

**Дамир:**
Уйлағаным булды минең ошо хаҡта:
Һәр саҡ башҡорт ҡалҡҡан илгә ауыр саҡта.
Урал батыр, Вәлиди ҙә, Салауат та…
Оран һалған, бирмәйек, тип, илде ятҡа.

Был турала халҡым күптән әйткән булған:
Балтаң билдә саҡта һиңә бар ҙа туған.
Әйт, улайһа, һин һөйләгән дейеү-пәрей
Һәм бүреләр кисә генә ҡайҙа булған?
Һис шигем юҡ, ул - ҡуйында үҫкән йылан.

Сит мәмләкәт көнләшерлек илебеҙ бар,
Әммә әле ситтәр алмаҫ билебеҙ бар.
Күпме быуын михнәт күреп ҡорған донъя -
Бөгөн шунда бөтә йортһоҙ-ерһеҙ һыя,
Тора биргәс, мин бындағы, тип шарт ҡуя,
Тыныс илде урталайға шулай ҡыя.

Һыу болғанһа, өҫкә ҡалҡһа сайы, ләме,
Кем аңлаһын аҙаҡ - ҡайҙан, кем һуң кеме…
Шул түгелме ҡәһҡәһәләй аҫтыртынлыҡ?
Ят бауырҙар беҙҙең хәлде яҡшыртырмы?

**Әхмәр:**
Ят бауырҙар дәғүә ҡуя йәнебеҙгә,
Ожмах кеүек гөл баҡсалы еребеҙгә.
Кемде генә һыйҙырманы Башҡортостан,
Барыһы ла урталыкта, башҡорт - оста...

Килмешәктән уңды лаһа Башҡортостан,
Мәрхәмәтлек фонды лаһа Башҡортостан,
Кемгә кәрәк, күпме кәрәк, ал, алығыҙ,
Йорт һалығыҙ, өйләнегеҙ, балалағыҙ.

Әммә ләкин бер нәмәне онотмағыҙ,
Ҡаныбыҙҙы беҙҙең берүк болғатмағыҙ.
Ошо тупраҡ беҙҙең ҡанға һуғарылған,
Аллаһ тағы ҡарап тора юғарынан...

Һеҙ бәхетле булырһығыҙ ошо ерҙә,
Йәнбикәнең, Йәнбирҙенең таш өйөндә.
Фәҡәт бары беҙҙең генә ризалыҡтан,
Был ер беҙгә бер үк ваҡыт зыярат та...

Бабич әйткән, был ерҙәргә киләсәктә,
Киләсәктә, ошо беҙҙең көрәсәктә,-
Хатта Хоҙай үҙе бер саҡ ҡыҙығыр, тип,
Белде микән Иблис килеп тығылыр, тип.

Дейеү-пәрей, аждаһалар, ҡәһҡәһәләр,
Шул Иблистән ебәрелмеш бар бәләләр.
Беҙҙең халыҡ тыуған мәңге көрәшергә,
Тик тыумаған тыуған ерен өләшергә!

Әйткәйнем бер:
"Башҡорт булыу ауыр", - тиеп,
Өҫтөбөҙгә ҡара яуҙар яуыр, тиеп.
Тыныс ҡына йәшәүҙәр юҡ беҙҙең затҡа,
Уралтауға өйөрөлөп тула яттар.

Ошо ерҙә бил һынаша Изге - Яуыз,
Беҙҙең ерҙә дәғүәләшә Хоҙай - Иблис.
Тимәк, беҙгә ныҡ торорға, ныҡ торорға,-
Кешелекте яуызлыҡтан ҡотҡарырға.

Беҙ ныҡлыҡҡа һынау өсөн яратылған,
Халыҡ итеп Уралтауға таратылған.
Шулай ғына аңлай алам хәлебеҙҙе,
Хоҙай һәр саҡ һаҡлап тора йәнебеҙҙе.

Минең һүҙҙәр бары йәнә ҡабатлауҙыр,-
"Урал батыр" өҙөктәрен һамаҡлауҙыр.
Бер уйлаһаң, унда ятҡан кинәйәләр
Бөгөнгөгә туп-туралы мәғәнәлә.

Тыныс тормош булмаҫ шуға, Дамир дуҫым,
Әйт һүҙеңде, йөрәгеңә ҡуйып усың!

**Дамир:**
Ерҙә тормош тыныс ҡына барһын өсөн,
Өс ғәләмде хәтерендә тотҡан кешем:

Береһе - ни мираҫ иткән ата-баба,
Өсөнсөһө - шул мираҫың кемгә ҡала?

Икенсеһе - ул беҙ, беҙҙең быуын, заман,-
Ватып-ҡороп, барған саҡта алға табан,
Ниҙе һаҡлап, ниҙе ары үҫтерергә,
Ә нимәне ҡарында уҡ үлтерергә,-

Ана шул бит әлеге бар ығы-зығы.
Шунда һанай һәр кем үҙен аҡыллыға.
Әлмисаҡтан үҙгәргән дә донъя, заман,
Был ғәмәлдәр дөйөм маяҡ булып ҡалған.

Ҡыҙыҡтым мин АҠШ тигән мәмләкәткә:
Алға табан ул өҙлөкһөҙ хәрәкәттә.
Асылдары ябай икән уның бары -
Ил тыуғандан үҙгәрешһеҙ ҡанундары.

Тағы, имеш, һәр саҡ үҙен ҡуя өҫтөн,
Уға шартын ҡуя алмай ситтән һис кем.
Рәхим ит тә, йәшә барып, булһаң тыйнаҡ,
Йә иҫбатла тоғролоғоң Арнольд һымаҡ…

Шул ҡанундар беҙҙә тағы онотола,
Урал батыр иҫкә төшә ана шуға.
Нисә тапҡыр ҡан яңыртып Башҡортостан,
Бына тағы илде юҡ-бар мөртәт баҫҡан.

Сығарһынмы тағы Урал Аҡбуҙатын,
Заман башҡа, йоҡла, тиһеңме, йә, халҡым?
Заман башҡа, эйе, хәҙер ғәмәл икәү:
Бүлеп алыу, алып ҡасыу йәһәт ситкә.
Дәүере шул: юҡ тыйыуҙар, хатта сиктәр…

**Әхмәр:**
Әйтеү генә анһат, Дамир,
Киләсәктә кем һуң ҡалыр?
Башҡорт ҡаны тамған ерҙә,
Юҡҡамы ҡан тамған беҙҙән?

Ошо ерҙе һаҡлағанбыҙ,
Башҡа сара тапмағанбыҙ.
Яуыздарҙы ҡыуып, еңеп,
Ә ниңә һуң бөгөн килеп...

**Дамир:**
Хәҙер ҡорал уйнатыуҙар
Күрәһең дә, хилафтыр ул:
Унлата ҡон ҡайтарырҙар
Йорт-ереңде аҡтарырҙар.

Төп кәс, тимен, сәйәсәттә
Дөмбәҫләүҙәр иблистәрҙе.
Аҫтыртындың, ҡәһҡәһәнең
Фашлау фарыз бар эштәрен.

Туҡһанынсы йылдар һымаҡ
Берҙәмлекте һөрһәк алдан,
Бында беҙгә көн булмаҫ, тип,
Ҡасыр ине Иблис, шайтан…

**Әхмәр:**
Ҡыпсаҡ апай* әйткән ине,
Һүҙе йәнде өткән ине:
"Беҙ көслө тик ғәҙел яуҙа,
Мәкерһеҙ һәм ғәҙел дауҙа..."

Миңә ҡалһа, иблистәрҙе,
Власть өсөн еңмештәрҙе
Фашлау ғына етмәй хәҙер,
Барыһына улар әҙер.

Ҡасһалар ҙа хурлыҡтарын,
Кире ҡалҡыр орлоҡтарын
Улар бында сәсеп китә,
Тағы хаслыҡ үҫеп китә.

Һин дә тәнә әйткән инең,
Һүҙең йәнде өткән ине.
Үҙ илендә башҡорт кемгә
Ҡамасау, тип, нисек, ниңә?

**Дамир:**
Ул һүҙҙәрем, ике башлы таяҡ һымаҡ,
Үҙ башыма төштө йәнә, булып туҡмаҡ.
Әҙме күҫәк, йоҙроҡ алған Ҡыпсаҡ апай,
Башҡорт илен яла яғыуҙарҙан яҡлап.

Ил эсендә зыялыға төшкән яҙмыш -
Типкеләнеү, өҙгөләнеү, талаш-ыҙғыш.
Был хаҡта ла төрлө бәхәс арта тора,
Тик һәр даим ундай халыҡ ҡалҡа тора.

Әле бына һорау тыуа уйланыуҙан -
Үтә, тимен, баҫылдымы зыялыйҙар?
Ил өҫтөндә оран үтә мөсһөҙ һымаҡ.
Кем аңлатыр - ҡайҙа дошман, ҡайҙа ҡунаҡ?

Илдә тыныс, ҡында ҡылыс булған саҡта,
Әллә бушмы баш ватыуҙар бының хаҡта?
Бара әле етештереү, төҙөлөштәр,
Унан тыш та бихисап бит башҡа эштәр,

Бармы көнө оран һалыр сәйәсәттең?
Ошо хаҡта асыҡ ҡына итеп әйт һин...

**Әхмәр:**
"Ура!" тиеп, оран һалып йәшәр заман
Тороп ҡалған тарихтарҙа, ә беҙ һаман,
Дамир дуҫҡай, үткән менән һаташабыҙ,
Ракетаға ҡылыс болғап маташабыҙ.

Кемдә бар һуң беҙҙекеләй данлы тарих,
Тик үткәнгә генә булмай икән барып.
Беҙгә кәрәк тарих менән ҡоралланып,
Асылыңды ҡуҙғатырҙай оран һалыу.

Беҙгә тағы ҡытай кеүек артыу кәрәк,
Шул тәңгәлдә бер фекергә ҡайтыу кәрәк,
Әйтеү кәрәк:
"Башҡорттарым, тик артығыҙ,
Күләм менән билдәләнер сифатыбыҙ!.."

Илебеҙ бит башлана тик һинән, минән,
Ә мин үҙем башланам бит үҙ-үҙемдән.
Миңә ҡалһа, үҙ йәнеңә кәрәк оран,
Юҡтыр хәҙер ошонан да кәрәк ҡорал.

Ә әлегә беҙҙең алда һайлау тора,
Шулай тимен, үҙ-үҙемә һалып оран:
Мин ҡушылам үҙ рухымдың тауышына,
Яҙмышым бит Башҡортостан яҙмышында!

**Дамир:**
Һинең менән бик йыш ҡына килешеп,
Әйтешеп йә ҡайсаҡ һүҙгә килешеп,
Йүнәлеште ләкин аныҡ тоябыҙ:
Башҡортлоҡто һәр саҡ алға ҡыуабыҙ.

Әле тағы шуға килә һүҙебеҙ:
Үҙебеҙгә ярҙамсы тик үҙебеҙ!
Белгән быны Вәлиди һәм Салауат,
Ҡалдырғандар беҙгә изге аманат.

Ил тигәнең - һинең тыуған ер булыр,
Ерҙе тотҡан - ил аҫылы ир булыр.
Ил торғанда оло һайлау алдында
Ирҙәр һүҙе Уралтауҙай бер булыр.

Шуға әле һаман йәшәй илебеҙ,
Бөтмәгәндер әле алда көнөбөҙ,
Булып торор алда бик йыш һайлауҙар,
Беҙгә әле шуны мөһим аңлауҙар:

Берҙәм булһа, йәшәр, йәшнәр Уралда
Башҡортостан тигән күркәм өйөбөҙ.

**Әхмәр:**
Зәйнулланың  йыйынында** Мәхмәт шәйех,
Әйткән ине халҡыбыҙға башын эйеп:
-Ҡорбан булғас һаҡлап динен, тыуған ерен,
Халҡығыҙҙың тороп ҡалған ундан бере.

Ошо хәлде Хаҡ Тәғәлә белә бит ул,
Үҙен  һаҡлаусыларҙы Ул һөйә бит ул.
Донъялыҡҡа башҡорт булып тыуыуығыҙ,
Хаҡ Тәғәлә мәрхәмәтен татыуығыҙ...

Ә беҙ, дуҫым, ниңә һаман зарланабыҙ,
Донъя малы, тиеп һаман алданабыҙ?
Беҙгәме ни ошонан һуң бошонорға,
Бер-беребеҙ хатаһында соҡсонорға?

Тағы ла һин йөрәгеңә ҡуйып усың,
Әйт әле бер үҙ һүҙеңде, Дамир дуҫым?

**Дамир:**
Зарланыу ул - бәндәләрҙең тәбиғәте,
Бәлки, шул да үҫтерәлер йәмғиәтте...
Аңлауымса, был әлегә - сирҙе табыу,
Сирлебеҙ, тип бар ғаләмгә оран һалыу.

Ә шулай ҙа бәлә һалыу - артыҡ һымаҡ,
Әйҙә әле, хәлебеҙҙе ҡара барлап:
Дөйөм алһаҡ, үткәндәрҙә беҙ кем инек,
Йыраҡ түгел, кәм тигәндә быуат элек?

Халыҡтарҙың тарихы бит быуат түгел,
Уның өсөн беҙҙең ғүмер - тик бер миҙгел!
Ә бит яҡшы хәтерләйем бала саҡты:
"Башҡорт" тиеп әҙ
алдыммы мин туҡмаҡты?

Тағы ла бер быуат артҡа күсеп ҡара,
Һәм күҙалла - был илебеҙ ҡайҙа бара:
Шөкөр, тиеп әйтергә лә еткәндер, тим,
Дәүләттәргә, илдәргә бит бөгөн "хана"!

Бәлки, тием, етмәнеме артыҡ зарҙар,
Ҡанлы тарих, зарлы йырҙар, тандыр уйҙар?
Кәрәкмәҫме йәш быуынға ышанырға,
Аманатты һаҡлау өсөн тапшырырға?

**Әхмәр:**
Һүҙебеҙҙе "шөкөр" менән тамамлауың,
Һәм дә тағы йәштәр менән дауамлауың,-
Оптимислыҡ сифаттарың оҡшай, дуҫым,
Үҙем әйтәм йөрәгемә ҡуйып усым...
Юҡ, әйтмәйем, тик Бабичты ҡабатлайым,
Ул әйткәнде үҙемсәләп һамаҡлайым:
Ҡалһын өсөн Башҡортостан, халҡым,
Мин үлергә әҙер миллион тапҡыр!

*Ҡыпсаҡ апай - шағирә Тамара Ғәниева.

**Зәйнулланың йыйынында - Зәйнулла ишан Рәсүлевтың 180 йыллығы.

КИТАБЕННАС

**Гәзитебеҙ баш мөхәррире, билдәле журналист, БР-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты Гөлфиә Янбаеваның әле ошо көндәрҙә генә Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә донъя күргән китабының исеме "Елле фекерҙәр елгә осмаһын" тип атала. Исеменән үк күренеүенсә, китапҡа авторҙың йәшәйешебеҙ, донъя, заман, тарих, дин, шәхес, милләт яҙмышы хаҡында ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәре, көтөлмәгән һығымталары, ҡанатлы һүҙҙәре, автор үҙе баш һүҙҙә әйткәнсә, йөҙ кәлимә фекере тупланған. Фекерҙәр, күҙәтеүҙәр үҙенсәлекле рәүештә дүрт өлөшкә бүленгән, улар: "Елле фекерҙәр елгә осмаһын", "Журналист һабаҡтары", "Матурлыҡ тураһында кәлимәләр", "Үҙем тураһында ҡайһы бер кәлимәләр".**

# ЙӨҘ КӘЛИМӘ ФЕКЕРҘӘР...

## йәғни 2 минут та 24 секундта тыуған уйҙар




### Жанрмы, формамы?

Китапҡа ингән бер кәлимә фекерҙәрҙең күбеһе "Киске Өфө" гәзитенең "Бер кәлимә фекер" рубрикаһында донъя күрҙе лә инде. Шуныһы ҡыҙыҡлы: тик ошо баҫмала барлыҡҡа килгән һәм гәзиттең бер үҙенсәлекле яңылығы, биҙәге булған был рубрикала баҫылған кәлимәләрҙең һәр ҡайһыһы, күләме яғынан ҡыҫҡа ғына булыуына ҡарамаҫтан, зауыҡлы йөкмәткеле һәм һығымтаһында әйтелгән фекере менән беҙ күреп-белеп өйрәнгән ысынбарлыҡтан парадоксаллеге, йәғни ғәҙәти булмауы менән айырылып тора. Уларҙы уҡыһаң, яңылыҡ, мәғлүмәт кенә алып ҡалмайһың, зиһенең байый, күңелең ҡанатлана, үҙең дә һиҙмәҫтән, кәлимә фекерҙә һүҙ барған төшөнсәләр, һығымталар аша үҙ булмышыңды көйләргә, хаталарыңдан арынырға, маҡсаттарыңа дөрөҫ юҫыҡ тоҫмалларға тотонаһың. Был йәһәттән кәлимәләрҙе шартлы рәүештә халыҡ педагогикаһы мәктәбенең шәхес тәрбиәләүҙәге үҙенсәлекле һабаҡ биреүсе дәрестәре тип тә атарға мөмкин булыр ине. Автор үҙенең кәлимәләрендә халҡыбыҙ ижады өлгөләрен, хикәйәттәрҙе, риүәйәттәрҙе, лаҡаптарҙы, мәҡәл-әйтемдәрҙе оҫта һәм урынлы файҙалана.

Бер яҡтан уйлағанда, бер кәлимә фекерҙәр совет осоронда үтә популяр булған мәғлүмәт, яңылыҡ, һүрәтләмә жанрҙарын да хәтерләтә. Әммә уларҙан айырмалы рәүештә тәүге өлөштә һүҙ барған ваҡиғаға, мәғлүмәткә, күренешкә авторҙың үҙ позицияһын белдереүе аша һис тә көтөлмәгән фекер әйтергә тырышыуы бер кәлимә фекерҙәрҙе күркәм итә лә инде. Был йәһәттән бер кәлимә фекерҙәрҙе журналистиканың яңы жанры үк тип булмаһа ла, мәғлүмәттең ҡыҫҡаса аналитик формаһы тип тә нарыҡларға мөмкин булыр ине. Был форма зарурлығы аңлашыла ла, сөнки электрон мәғлүмәт саралары үтә ныҡ үҫешкән заманда ҡағыҙға төшкән яңылыҡ, мәғлүмәт оператив була алмай. Йәғни гәзит-журнал уҡыусыға барып еткәнсе бик оҙаҡ ваҡыт үтә, электрон саралар иһә ул мәғлүмәтте минутында, секундында уҡ ҡулланыусыһына еткерә. Шуға күрә "Киске Өфө" гәзитендә барлыҡҡа килгән "Бер кәлимә фекер" рубрикаһы яңылыҡҡа, мәғлүмәткә аналитик төҫ биреү маҡсатынан барлыҡҡа килгәндер, тип тә уйланыла. Икенсе төрлө әйткәндә, хәҙерге ваҡытта ҡағыҙға һалынған яҙма мәғлүмәт саралары тик яңылыҡ, тик мәғлүмәт еткереүсе генә сығынаҡ була алмай. Тимәк, был рубрика ваҡытлы матбуғатта форма, стиль яңырыуы йәһәтенән бер башланғыс роленә лә дәғүә итә ала.

Әйткәндәй, күп һанлы уҡыусылар фекеренсә, Гөлфиә Янбаева етәкләгән "Киске Өфө" гәзите тап ошо сифаты менән башҡа баҫмаларҙан айырыла ла инде. Әле гәзит яңы сыға башлаған осорҙа уҡ атаҡлы сатирик шағирыбыҙ мәрхүм Буранбай Исҡужин үҙенең бер хатында "Киске Өфө"нө "ҡуйы гәзит" тип тә атағайны. Ә бит Буранбай был аңлатмаһы менән мәрәйҙең тап унлығына барып тейгәйне. Хат авторының "ҡуйы"тигән төшөнсәһе гәзиттә баҫылған мәғлүмәттең, яңылыҡтың тик ҡоро, яланғас факт ҡына булмауы, ул аналитик "тышлыҡ"ҡа төрөлөп биреләүе хаҡында аңлата ине. Бер кәлимә фекерҙең дә асылы тап ошо "ҡуйылыҡ"та бит тиеүем. Икенсе бер уҡыусыбыҙ логик яҡтан Буранбай Исҡужиндың фекерен дауам итеп: "Һеҙҙең гәзиттең бер етешһеҙ яғы бар, уны мотлаҡ уҡырға кәрәк, унда яҙылғандарҙы аңлап уҡыр өсөн миңә кәмендә бер аҙна кәрәк..." тигәйне. Был хат авторының да бер кәлимә фекер төшөнсәһенең мәғәнәһен үҙенсә аңлатырға тырышыуын төшөнөүе ҡыйын түгел.

### Көтөлмәгән фекер эффекты

Гөлфиә Янбаеваның китабына ингән бер кәлимә фекерҙәр тағы шул яғы менән дә үҙенсәлекле: һәр бер кәлимә фекер башланышы, фекер үҫеше һәм һығымтаһы менән тулы ҡанлы берәмекте тәшкил итә. Кәлимә фекер гәзит эсендә булһынмы, китаптамы, йәки булмаһа үҙе айырым килеш тә тулы ҡанлы автономлы берәмек булараҡ йәшәй ала. Уның был асылы әҙәби әҫәрҙәргә яҡынлығындалыр, фәлсәфәүи йөкмәткеле булыуындалыр. Уймаҡ хикәйәләрҙән айырмалы рәүештә бында тормош ваҡиғаһын һүрәтләүсе сюжеттың булыуы мотлаҡ түгел, шул уҡ ваҡытта ундағы сюжет һыҙыҡтары хикәйәт-риүәйәттәрҙәге һымаҡ йәғни ул һыҙыҡтарҙың һәр осо төп фекергә ялғана. Кәлимәләрҙең ҡыҫҡа һәм йыйнаҡ, тулы ҡанлы булыуы тап ошонда, йәғни фекер тығыҙлығында.

Шулай ҙа мәғлүмәт, уй, фекер еткереүҙең бер кәлимә фекер формаһы ниндәй яғы менән былдай үҙенсәлеккә эйә һуң? Әйтергә кәрәк, уҡыусы быға тиклем һис тә уйлап ҡарамаған, бәлки, башына ла килтермәгән көтөлмәгән фекер эффекты менән. Ә беҙ философиянан бер хәҡиҡәтте яҡшы беләбеҙ: унда категорияларҙың "көтөлмәгәнлег"е һығымтаһы буйынса "законлы", йәғни тәбиғәттә һәм кешелектә бер күренеш тә осраҡлы, көтөлмәгән түгел. Быны тикшерер өсөн авторҙың "Бөйөк шәхестең юҡҡа сыҡҡаны" тигән ҡыҫҡа ғына кәлимәһенә анализ яһап ҡарайыҡ:

"Билдәле шәхестең юбилей кисәһе булды. Шәхестең талантынан күңел кинәнде. Халыҡтың уның талантын таныуы, күтәреүе лә һоҡландырҙы. Әммә... Кисәнең иң аҙағында сәхнәгә сыҡҡан ғаиләһе бар кәйеф күтәреңкелеген һыпырып алды ла ташланы. Ҡатыны икенсе милләт кешеһе, тимәк, балалары ла башҡортса һөйләшмәйәсәк, фиғеле лә башҡорттоҡо һымаҡ булмаясаҡ - был инде күптән раҫланған хәҡиҡәт. "Атай", тип әйтте шулай ҙа ҡыҙҙарының береһе, шунан башҡа башҡортса бер һүҙ ҙә сыҡманы ауыҙҙарынан. Етмәһә, ағайҙың бүләсәрҙәре, русса шиғыр уҡығандан һуң , ярым яланғас кейем менән көнсығыш көйөнә бейей башланы. Ә арыу ғына "һуҡмыш" булып алған ҡатыны, әсәй, өләсәй кеше, ағайыбыҙҙың муйынына уралды ла, уны супылдатып үбә башланы.

Шәхес даны шул минутта саң-туҙанға әйләнде лә, юҡҡа сыҡты. Йәлләү тойғоһо ғына ҡалды..."

Ни бары ун бер генә һөйләмдән торған ошо кәлимәлә талантлы милли ижади интеллигенция вәкиленең, улай ғына ла түгел, тотош быуын шәхестәренең, улай ғына ла түгел, тотош милләттең оло бәләһе, уның киләсәген юҡҡа сығарған фажиғәһе ап-асыҡ итеп күрһәтелгән дә ҡуйған. Мәсьәлә бында шулай итеп ҡуйылған: был фажиғә хаҡында хатта оҙон-оҙон романдар яҙып аңлатып бирергә кәрәкмәй. Был кәлимәлә көтөлмәгән фекер эффекты рәүешендә милләтебеҙ шәхесенең ғаилә ағзаларының уны ҡотларға сәхнәгә сығыу факты алынған. Әйткәндәй, хәҙерге ваҡытта Америка ғалимдары фекеренсә, кешелекте һәләкәткә алып килеүсе милләт-ара никахтар мәсьәләһе хаҡындағы кәлимәләргә китапта ҙур урын бүленгән. Шундай кәлимәләрҙең бер нисәһенең исемдәрен генә атап үтәйек: "Башҡорт ҡыҙы образы ниндәй?", "Үҙең булып ҡал", "Ярты-йортолар ҡурҡыныс", "Һуңлаған тәрбиә", "Ҡатнаштар хәүефле шул...", "Тәрбиәләй белмәү эҙемтәһе", "Милләт әсәһе булайыҡ", "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары" һ.б.

(Дауамы 16-сы биттә).

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МӘҒЛҮМӘТ ЗАМАНЫНДА...

## аралашыу етмәй

**Рәсих ЗӘЙТҮНОВ, БДУ-ның тарих факультеты доценты, тарих фәндәре кандидаты:** Ауылдағы эшһеҙлек, ауыл йәштәренең өйләнмәй йөрөүе кеүек мәсьәләләрҙе күтәреү, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләү - көнүҙәк талап, әлбиттә, шулай ҙа аралашыу ихтыяжы мөһимлеген иҫәпкә алып, һүҙҙе аралашыу темаһынан башлағы килә. Һүҙ барышында бүтән темаларға ла ҡағылырбыҙ.

Мине Өфөнән алыҫ урынлашҡан ауылдарыбыҙҙың республиканың мәҙәни донъяһынан айырымлана барыуы борсоуға һала. Һуңғы йылдарҙа яҙыусыларҙың, ғалимдарҙың, драма театрҙары, бейеү ансамблдәре коллективтарының, йырсыларҙың ауыл ерендә йәшәгән милләттәштәребеҙ менән күҙмә-күҙ аралашыуы, концерт сараларынан тыш, түңәрәк өҫтәлдәрҙә фекер алышыуы кәмегән һымаҡ. Ауыл халҡының, берҙән, миҙгел һәм көндәлек мәшәҡәттәргә күмелеп, икенсе яҡтан, ҡала интеллигенцияһының да үҙ мәнфәғәттәре эсенә генә бикләнеп, битарафлана барыуы, миңә ҡалһа, бик хәүефле билдә. Интеллигенция менән ауыл халҡын дәүләт осраштырыр, тип көтөү ҙә урынһыҙ, минеңсә. Буржуазия яғынан ярҙам булмаһа, капитализмға йөҙ борған дәүләттең теләһә ҡайһы кимәлдәге сараны, йүнәлеште ойоштороу мөмкинлеге лә сикләнә барыбер. Шуға, халҡыбыҙ менән диалог ептәрен зыялыларыбыҙға нисек тә булһа үҙҙәренә көйләргә, үҙ көстәре менән тергеҙергә тырышырға кәрәктер, тип уйланыла.

Былдай аралашыуҙар халҡыбыҙ өсөн нимәһе менән әһәмиәтле? Тәү сиратта, ауыл ерендә йәшәүсе йәштәр, балалар киләсәге өсөн... Уларға уй, идея, рух һалынһын, йәшәйештә ниндәй һөнәр эйәләре нығыраҡ кәрәк икәнлеге барып ишетелһен өсөн. Юғиһә, күп кенә ауыл балалары, башлыса урам тәрбиәһе алып, артабанғы тормошонда ла тапалған һуҡмаҡтар буйлап атлай, үҙенсәлеген юғалта. Рух төшөнсәһе менән таныш булып та, үҙендәге рух орлоҡтарын аса алмайынса, әйтәйек, бөйөк математик һәләте була тороп, Себерҙә шабашкала йөрөй. Йәғни, кодтарға йәшерелгән мәғлүмәтте асыу юлдарын бала саҡтан телгә, тарихҡа, ғилемгә ынтылыу аша өйрәтергә кәрәк. Ул саҡта ауылдарыбыҙҙан халҡыбыҙ өсөн тырышып эшләй торған йәштәребеҙ үҫеп сығыр.

Ҡала балалары тураһында бер-нисә кәлимә. Үткән быуаттың 30-сы йылдарынан алып 90-сы йылдарға тиклем системалы рәүештә халҡыбыҙ аңынан төрө юлдар менән юйҙырылған был кодтар, бөгөн килеп, яңыса һулышта үҙен һиҙҙерә башланы шикелле. Һәр хәлдә, быны төҫмөрләргә була. Әйтәйек, ҡалала тыуған балаларыбыҙ араһында рух һиҙелә - был да шатлыҡлы күренеш, миңә ҡалһа. Фәнни, спорт, мәҙәни түңәрәктәрҙең һәм төрлө йүнәлештәге мәктәптәрҙең күплеге ҡала балаларының төплө белем алыу, үҙ һәләтен үҫтереү мөмкинлектәрен арттыра. Мәҫәлән, "Тамыр" студияһы. Ошо ижади мәктәптә шөғөлләнгән балалар ыңғай миҫал була ала.

Йомғаҡлап, ниндәй генә сетерекле мәсьәләне хәл итергә кәрәк булғанда ла бөгөнгө заманда иң тәүҙә матди нигеҙҙең ныҡлығы төп шарт икәне тураһында хәтергә төшөргө килә. Ауылыбыҙҙың матди нигеҙенең ныҡлығы милли буржуазия ҡулында. Башҡорт халҡының буржуазия ҡатламы бармы бөгөн? Бар, тик халҡыбыҙға һиҙелерлек ярҙам итә алырлыҡ кешеләребеҙ берәү-икәү генә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Татар, ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәребеҙҙең милли буржуазияһы өлгө булырлыҡ. Ә беҙгә иһә, аҫаба, йәғни бай йәшәгән замандарҙан ҡалған ирәүән, хөр, ҡабаланмаҫ холҡобоҙҙо ҡырмыҫҡа һымаҡ көнөн-төнөн эшләүсе тырыш һәм аҡыллы хеҙмәтсән холҡона үҙгәртергә кәрәк. Шул саҡта халҡыбыҙ ҙа алға китер.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАЛҠЫН ТЕЙМӘҺЕН, ТИҺӘҢ...

## яҡшы кәйефтә бул

■ Немец ғалимдары тест ярҙамында бер ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Германияның Магдебур университетының бер төркөм тикшеренеүселәре 65 йәштән 75 йәшкә тиклемге ололар араһында тест һорауҙарына яуап алыу ойошторған. Был ҡарттарҙың яртыһына составында дофамин гормоны булған таблеткалар, яртыһына ошондай уҡ таблетка формаһында яһалған ябай кәнфиттәр таратҡандар. Икенсе төркөмдөң күрһәткестәре таблетка ҡабул иткәнгә тиклем алынған һөҙөмтәләрҙән айырылмаған. Ә беренсе төркөм 20-30 процентҡа яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәткән. Ғалимдар әйтеүенсә, дофамин гормоны хәтерҙе яҡшырта. "Бәхет гормоны" психикаға ғына түгел, тән өсөн дә файҙалы: хәтер, шулай уҡ баш мейеһенең когнитив функциялары яҡшырыуы кешене дегенератив ауырыуҙарҙан, мәҫәлән, Паркинсон, Альцгеймер ауырыуҙарынан да һаҡлай.

■ Ҡайһы бер бала тыуғанда уҡ гениаль рәссам йәки математик булып тыуа, бында әсәй кешенең ауырлы саҡта организмында булған гормональ балансы тәьҫир итә. АҠШ-тың Альберта университеты психологтары даһилыҡтың тәбиғәте тураһында яңы мәғлүмәттәргә юлыҡҡан. Профессор Марти Мразик кешенең даһи булыуы биологик күренеш тип иҫәпләй һәм ул бала ҡарында саҡта тестостерон гормонының артыҡ булыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә тип раҫлай. Тестостерон баш мейеһендә, бигерәк тә уның уң яҡ ярымшарында төрлө бәйләнештәрҙең көслөрәк үҫешен булдыра.

■ Техас университеты тикшеренеүселәре белдереүенсә, иң файҙалы тәмләткес булып куркума тора. Диетологтар уны диабетҡа һәм депрессияға ҡаршы яҡшы сара, тип иҫәпләй. Борон табиптар уны гепатит һәм гинекология сирҙәренә ҡаршы ҡулланған, эсәк, ҡан ауырыуҙарын дауалаған. Хәҙерге заман медицина хеҙмәткәрҙәре лә куркуманың был үҙенсәлектәрен таный. Яман шеш, һимереү, склероз булмаһын тиһәгеҙ, был тәмләткесте йышыраҡ ҡулланығыҙ.

■ Ә бына Ҡытай ғалимдары сәскәләр менән дауаланырға кәңәш итә. Уларҙың ҡайһы берҙәре баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫир итә һәм уны ҡартайыуҙан һаҡлай. Мәҫәлән, умырзаялар Альцгеймер ауырыуы мәлендә яҡшы. Уның составындағы галантамин нейрондарҙағы мәғлүмәттәрҙең әүҙемерәк тапшырылыуына булышлыҡ итә, һөҙөмтәлә, ауырыуҙың аҡыл функцияһы яҡшыра. Галантамин нәркәс сәскәһендә лә бар, ғалимдар әлеге мәлдә был матдәне онкологик ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланыу мөмкинлеген өйрәнә. Австралия ғалимдары зәғәфран күреү ағзалары күҙәнәктәренең һығылмалылығын арттырыуын асыҡлаған. Крокус составындағы колхицин шештәрҙе иҫкәртә. Миләүшә тынысландыра, нервылар көсөргәнешенән арындыра, йоҡлай алмағанда ярҙам итә.

■ Яҡшы кәйеф һыуыҡ тейеүҙән һайлай. Дуҫтарың менән күңел асҡан, яратҡан эшең менән шөғөлләнгән, башкөлләй эшкә сумған саҡта һин үҙеңдең иммун системаңды ике көнгә етерлек итеп нығытаһың. Ә насар кәйефтән һуң иммунитет ике тәүлеккә ҡаҡшай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һау кеше насар кәйефтә урамға сыҡһа, шунда уҡ һыуыҡ тейҙереп, ауырып китә ала.

ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ

# КҮГӘРСЕНДӘР...

## ниңә анһатҡа һалышҡан?



**Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, тормош менән бергә кешеләр генә түгел, тәбиғәт тә ҙур үҙгәрештәр кисерә, икенсе төҫ ала. Ошо сәбәпле, үҙе йәшәгән мөхиткә яраҡлашыу йәһәтенән, эргә-тирәбеҙҙә йәшәгән кейектәрҙең, ҡоштарҙың да йылдар буйы ҡалыплашҡан ғәҙәттәре, үҙҙәренә генә хас булған ҡылыҡтары ла үҙгәрә. Һәр хәлдә, Учалы районы Ҡобағош ауылында йәшәүсе Әхмәт ағай Фазлетдинов шулай тип раҫлай. Ул тәбиғәт серҙәренә төшөнөп, уның менән бер тулҡында йәшәргә тырышҡан, ошо йәһәттән төрлө күҙәтеүҙәр алып барған кеше. Әле беҙ "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға уның ҡоштар һәм хайуандарға ҡағылышлы күҙәтеүҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

- Элек-электән тәбиғәттең һәр күренешенә, унда йәшәгән йән эйәләренең ҡылығына айырым иғтибар бирергә, уларҙы күҙәтергә күнеккәнмен. Ошо күҙәтеүҙәрем нигеҙендә, тәбиғәт менән кешелектең үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булып, уларҙың бер бөтөн булыуына инанғанмын. Кейек-ҡоштарҙың ҡыланышы, үҙ-үҙен тотошо аша һауа шарттарын да алдан уҡ самалап ҡуям.

Мәҫәлән, эргәбеҙҙә генә йәшәгән **күгәрсенде** алайыҡ. Халыҡ элек-электән был ҡошҡа хөрмәт менән ҡараған, уны тыныслыҡ ҡошо тип һанаған. Күгәрсен йыраҡ араларға хәбәр ташып, ваҡытында почта хеҙмәтен дә яҡшы үтәгән. Тик бөгөн был ҡоштар ҙа анһатҡа һалынып алған һәм күбеһенсә кеше йәшәгән ерҙә йәшәүҙе хуп күрә башлаған. Шул арҡала, йорт-ҡура тирәһенән китмәй, кеше елкәһендә көн итергә тырышыуы менән үҙенә булған элекке хөрмәтте лә юғалта төшкән. Күгәрсен яҡшы оса белһә лә, аҙыҡ эҙләп ситкә китмәй. Йышыраҡ атлап йөрөй һәм аҙыҡты ерҙән сүпләп ашай. Улар һауа торошоноң үҙгәреүен бер нисә сәғәт алдан тоя. Оҙаҡ гөрөлдәй икән, көн йонсоуон көт тә тор. Аяҙ, ҡояшлы көндә күгәрсендәр ҡайҙалыр боҫоп ултырһа, тимәк, бер нисә сәғәттән көн боҙоласаҡ. Ите үпкә ауырыуын дауалауҙа файҙалы.

**Торналар** ҙа барометр кеүек. Көн йонсоуон ике-өс көн алдан белдерә. Юғарынан ҡысҡырһа, йыл - ҡоро, ә һаҙлыҡлы урындан ҡысҡырһа, һәйбәт килә. Әгәр ҙә торналар түбәндән шым ғына шәп итеп оса икән, көн боҙоласаҡ. Өҫтән, ҡабаланмай ғына, үҙ-ара һөйләшкән кеүек тауыш биреп осһа, көндәр аяҙ торасаҡ. Был ҡоштар парлашып йәшәй, бер ояға ике генә бала сығара. Яңғыҙ ҡалған торна икенсе йылына ла бала сығарған еренә ҡайта һәм йәйҙе шунда үткәрә. Улар август аҙаҡтарында, сентябрь баштарында уҡ туптарға өйөлөп, йылы яҡҡа китергә әҙерләнә. Һәр йылда ла бер ергә, дөйөм ҙур тупҡа йыйылалар. Йыйылған урындары күбеһенсә Верхнеурал яғында була. Торна элек-электән изге ҡош һаналған, уны рәнйетергә ярамай.

**Бытбылдыҡ** яланда, баҫыуҙа йәшәй, 3-4 бала сығара. Яҙ етеү менән ошо ҡоштоң нисегерәк бытбылдауын тыңлап алам. Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, ике ҡысҡырһа, йыл насар килә, өс ҡысҡырһа, уртаса, ә инде дүрт тапҡыр бытбылдай икән, йыл яҡшы буласаҡ.

**Һуйыр** - һәр саҡта ла аталы-инәле парлашып йөрөй. Ҡышын ҡар аҫтында ҡышлайҙар. Март айында уҡ уйнай башлайҙар. Уларҙың 7-8 балаһы була. Себештәрен күбеһенсә ата ҡош һаҡлап йөрөй. Балаларын ҡыйырһытҡан осраҡта хатта кешегә лә ҡурҡмай ташлана. Шундай осраҡ бер ауылдашыбыҙ менән булды. Машинаһы менән китеп барған егет, һуйырҙың себештәрен тапата яҙғас, ата ҡош ҡанаттарын ҡаға-ҡаға машинаның капотын суҡырға тотона. Көн йонсор булһа, һуйырҙың тауышы бөтөнләй ишетелмәй. Улар һауа шарттары яҡшы, көн аяҙ булғанда ғына уйнай. Ҡоро, йылы көндә улар ағастың иң бейек ботағында ултыра. Был ҡош та башҡорттарҙа изге һаналған. Уның ите лә, йомортҡаһы ла бик файҙалы.

**Сел** иһә , яңғыҙ бала сығара ла, ике-өс ғаилә бергә йыйылып, тупҡа тупланып йөрөй. Үлән орлоғо менән туҡлана. Сел бик йылғыр ҡош. Ул ерҙә лә тиҙ хәрәкәт итә, хатта ҡуйы ботаҡлы ағас араһында ла бик тиҙ осоп йөрөй. Бер ваҡытта ла ағастың иң бейек еренә ултырмай, ә урта тирәләге ботаҡҡа ҡуныуҙы хуп күрә. Был ҡоштоң ите лә, йомортҡаһы ла бик файҙалы. Хәҙер күптәр уны өйҙә лә аҫрай.

**Һандуғастар** быйыл беҙҙең яҡта күп булды. Уларҙың да төрлөһө бар. Һәр һандуғастың тауышы үҙенсә, барыһынығы ла матур түгел. Төрлө бөжәк, ҡорттар менән туҡланалар, еләкте яратып ашайҙар. Һандуғас сит күҙҙән һаҡланыу өсөн төрлө төҫтәге, ваҡ ҡына йомортҡа һала һәм 4-5 бала сығара. Ата ҡош балаларын ашатырға, ҡарашырға ярҙам итә. Июнь аҙаҡтарында бәләкәй ҡошсоҡтар оянан айырылып сыға. Был ваҡытта һандуғастар һайрауҙан да туҡтай. Ояны үлән аҫтына, йәш ҡайын үҫентеһе янына ла, серек ерек ҡыуышына ла эшләйҙәр.

**Мышы** - башҡорт халҡында изге хайуан һанала. Апрелдә үк быҙаулай. Балаһы ҙурайғансы үҙе менән йөрөй. Әгәр ҙә берәй ҡурҡыныс янаһа, балаһын аяҡтары араһына ҡыҫтырып алып ҡаса. Шундай күренеште үҙемдең бер нисә тапҡыр күргәнем булды. Көндөҙөн һаҙлы урындарҙа йөрөһәләр, төнгөләккә тауға менәләр һәм шулай итеп сит күҙҙән һаҡланалар. Ҡыш көнө үлән тибәләр, уҫаҡ ҡайырыһын яратып кимерәләр. Инә болан ата боланға үҙенең ҡайҙалығын белдерер өсөн йәш ағастарҙың ҡайырыһын һыҙырып билдә бирә.

**Бүреләр** күбеһенсә өйөр булып йәшәй. Ғәҙәттә — 5-6, кәмендә 3-4 бүре бергә йөрөй. Ҡыш көнө, артыҡ иғтибар йәлеп итмәҫ өсөн, бер-береһенең эҙенә генә баҫып йөрөйҙәр. Ҡартайған бүрене өйөргә индермәй, ташлап ҡалдыралар. Һунарға йөрөгәндә 30-40 саҡрымға тиклем юл үтәләр. Март айында көсөктәре тыуа, ә августарҙа уларҙы һунарға өйрәтә башлайҙар. Бүре, ояһы яҡын булған ерҙәге малға, кешегә теймәй, ғөмүмән, был тирәләге ауылға бөтөнләй яҡын килмәй. Бүре бик үсле йыртҡыс. Әгәр уны ҡыйырһытһаң, рәнйеткән кешеһен аңдып йөрөп, үсен алмайынса туҡтамай. Хатта бесән менән ябылған һарай башын туҙҙырып, малдарҙы боғаҙлап сыға.

**Айыу** ҙа бик үсле хайуан. Уның үҙенең айырым территорияһы була. Биләмәһенә яҙ көнө үк, буйы еткәнсә ағастарҙы һыҙырып, билге һалып сыға. Билдәләнгән ергә башҡаларҙы ла индермәй, үҙе лә шунан сыҡмай. Бер-ике көсөгө була. Ғәҙәттә, айыуҙар ҙа бер ғаилә булып, бергә йөрөй. Айыу кешенән дә хәйләкәрерәк. Үсен алыу өсөн төрлөсә хәйлә ҡора. Ауылда шундай хәл булғанын иҫләйем. Бер йылы үҙен яралаған һунарсыларҙы аңдып ятып, уларҙы туҡмап, машиналарын емереп китте. Һуңынан был айыуҙы саҡ атып алдылар.

Һуңғы йылдарҙа **төлкөләр** күбәйҙе. Тиреһенә баһа ҙур саҡта, һунарсыларға ла саҡ эләккән төлкө хәҙер хатта ауылға тиклем килеп инә башланы. Колхоздар тарҡалып, элекке кеүек йәйрәп ятҡан баҫыуҙар ҡалмағас, уларға ла йәшәү ауырлашты. Элек яландарҙағы иген, бесән эҫкерттәре өҫтөндә йоҡлап йөрөгән төлкөләрҙең ризығы - сысҡан да, кәбән аҫтында ғына ине. Иген булмағас, сысҡандар ҙа һирәгәйҙе. Төлкө нимә етте - шуны ашай, күбеһенсә ас йөрөй. Шул арҡала ҡотороу сире менән ауырый.

Күҙәтеүҙәр шуны күрһәтә: хәҙерге йыл миҙгелдәре элеккеһенән ҡырҡа айырыла. Тәбиғәттең ҡанундары ла аңлайышһыҙға, ҡырыҫыраҡҡа әйләнә бара. Һис көтмәгәндә, йәмйәшел йәй уртаһында ҡар яуып ғәжәпләндерә, йә иһә, декабрь бөткәнсе ҡара ер ятып, ҡар яумай аптырата. Ошондай ғәҙәти булмаған күренештәр инде ун йыл самаһы дауам итә. Бындай шарттарҙа хайуан-ҡоштар донъяһы ғына зыян күрмәй, ә ваҡытында дым, йылы алмаған үҫемлектәр ҙә үҫеп, уңыш бирә алмай. Быларҙың бөтә ғилләһе- тәбиғәт менән һаҡһыҙ файҙаланыуыбыҙ, киләсәк быуын хаҡында уйланмауыбыҙҙан килә...

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА**
**яҙып алды.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Бер кеше йыл һайын Ҡорбан байрамында ҡорбан хаҡын мохтаждарға аҡсалата таратыр булған. Изге ғәмәлде урынына еткереп башҡармауын: "Мин хайуандарҙы үлтерә алмайым",- тип аҡлаған. Сираттағы байрамда ла шулай эшләгән. Байрамдан һуң төшөндә Ҡиәмәт көнөн күргән. Кешеләр малдарға атланып ултырғандар һәм уларҙы фәрештәләр ожмахҡа илткән. Был кеше йәйәүләп барған. Ул фәрештәләрҙән ни өсөн үҙенең йәйәү барыуы хаҡында төшөндөрөүҙәрен һораған. "Был кешеләр үҙҙәре ҡорбан итеп салған малдарға атланған", - тигән йәннәт хеҙмәтселәре. "Мин дә бит ҡорбан хаҡына торошло саҙаҡа тараттым", -тип ныҡышҡан кеше. "Белмәнеңме ни, ҡорбан килтереү менән саҙаҡа таратыу бер иш түгел. Ҡорбандың дәрәжәһе күберәк", - тип яуап биргәндәр уға фәрештәләр.**

# ҠОРБАН САЛЫУ...

## Аллаһыға яҡынлашыу ул



Ҡорбан салыу - ул малдың йәнен алып, уның итен ашау, таратыу түгел. Ул кешенең итәғәтлеге, иманы емеше, ул -Аллаһы Тәғәлә алдындағы фиҙаҡәрлек. Раббыһын таныған, уның ниғмәттәренә рәхмәтле булған әҙәм балаларының үҙҙәрен Яратыусыһы алдындағы изге ғәмәле, Аллаһы Тәғәлә алдында дәрәжәләрҙең күтәрелеүенә сәбәп. Был изге ғәмәл Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт һәм Уға яҡынлашыу юлдарының береһе. Ҡорбан һүҙенең мәғәнәһе лә - "яҡынлашыу". Раббыңа үҙеңде, мөлкәтеңде, ғүмереңде фиҙа килтереү менән иҫбатлана. Уның нигеҙендә Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына бойһоноу һәм ошоно тормошҡа ашырыу ята. Раббыһы әмеренә күнгән өсөн генә мосолман изге ғәмәлде үтәй. Изге Ҡөрьәндә: "Аллаға уларҙың (ҡорбанға килтерелгән малдың) ите лә, ҡаны ла һис барып етмәҫ, әммә уларға һеҙҙең тәҡүәлек барып етер", - тиелә.

Ҡорбанға килтерелгән малдың тәүге ҡаны менән изге ғәмәлде үтәүсе мосолмандың күп гонаһтары ярлыҡана. Кешеләрҙең иң насарҙары, мөмкинлектәре була тороп та, ҡорбан килтермәгән һарандар, тип әйтелә хәҙистәрҙең береһендә. Мөхәммәт бәйғәмбәр Ҡорбан ваҡытында ике малды һуғымға килтерер булған. Береһен - үҙе, икенсеһен өммәте өсөн. Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә өлгәшергә теләгән хәлле мосолмандар ҙа шулай уҡ ике ҡорбан килтерә, береһе - үҙҙәре өсөн, икенсеһе - Бәйғәмбәр хаҡына.

Ғибәҙәттең тарихы Ибраһим бәйғәмбәргә ҡайтып ҡала. Уға улы Исмәғилде ҡорбанға килтерергә бойороҡ килә. Был Ибраһимдың итәғәтлегенә, иманына һынау була. Ул Аллаһы Тәғәлә әмеренә буйһона. Бәйғәмбәр Раббыһына тоғролоғон иҫбатларға әҙер икәнен күрһәткәс, ҡорбан йәннәттән төшөрөлгән тәкәгә алыштырыла.

Күп аяттарҙа, хәҙистәрҙә һөйләнә ҡорбан тураһында. Уның мөһимлегенә ислам ғалимдары айырым баҫым яһай. Үҙен мосолман тип һанаған һәм мөмкинлеге булған кешенең изге ғәмәлдән ситтә тороп ҡалырға хоҡуғы юҡ, тиҙәр. Ҡорбанға беҙҙең ерлектә ике йәше тулған һыйыр малын, йәше тулған һарыҡ, кәзәне килтерергә була. Һыйыр малын ете кеше, һарыҡ-кәзәне бер кеше ҡорбанға килтерә. Мал көр, сәләмәт булырға тейеш. Бер күҙгә йәки ике күҙгә лә һуҡыр булған, мөгөҙҙәренең береһе йәки икеһе лә төбөнә тиклем һынған, ҡолағы йәки ҡойроғоноң яртыһынан күберәге өҙөлгән, йәки мал аяғына баҫа алмаһа, ауырыу, үтә ябыҡ, хәлһеҙ булһа, тештәре булмаһа, имсәктәре боҙолһа, уны ҡорбанға килтерергә ярамай.

Малдың ите өс өлөшкә бүленә. Беренсе өлөш мохтаждарға таратыла. Шулай уҡ белем алған йәштәргә, дин юлында йөрөгән кешеләргә биреү хуплана. Шулай уҡ ҡорбан таратыу менән шөғөлләнгән махсус хәйриә ойошмаларына тапшырырға мөмкин. Икенсе өлөш туғандарға һәм яҡындарға таратыла. Өсөнсө өлөш ғаиләлә ҡалдырыла.

Зөлхизә айының 10-сы көнөндә (15 октябрҙә), байрам намаҙынан алып, өс көн дауамында, айҙың ун өсөнсө көнө башланғансы (17 октябрь ҡояш байығанса) ҡорбан салырға була. Был сиктәрҙә теүәл үтәү мөһим. Сөнки байрам намаҙынан алда һәм байрамдың өсөнсө көнөндә ҡояш байығандан һуң килтерелгән мал ҡорбан итеп ҡабул ителмәй, ябай һуғым булып ҡала.

Изге ғәмәлде тормошҡа ашырыуҙың бар нескәлектәрен дини китаптарҙан, календарҙарҙан табырға мөмкин.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ

## Ихтыяж өсөн донъя ҙур, ҡомһоҙлоҡто ҡәнәғәтләндереү өсөн - бәләкәй

*Һәр кешенең көсһөҙ яҡтары була, сәйәси көрәштә үҙенең маҡсатына өлгәшеү өсөн һәр кем улар менән файҙалана белергә тейеш. Шикләнмәгеҙ, дошмандарығыҙ һеҙҙең көсһөҙ яҡтарығыҙҙы файҙаланыу мөмкинлеген ҡулынан ысҡындырмаясаҡ.*



Билдәле Мысыр батшабикәһе Клеопатра беҙҙең эраға тиклем 44-се йылдың мартында Римдә үҙенең сәйәси ҡурсалаусыһы һәм һөйәре Юлий Цезарь үлтерелгәндән һуң, Римдең яңы власты уның үҙенә генә хакимлыҡ итеү мөмкинлеге бирмәҫтәрен яҡшы аңлай. Бының өсөн уға тиҙ генә Цезарҙың яҡын кешеләренең береһе, сенат тарафынан Мысырға батшабикәнең ант биреү тантанаһын ойоштороуға ебәрелгән Марк Антонийға йүгенто яһау ысулын табырға кәрәк була. Зирәк Клеопатра Антонийҙың йомшаҡ сифаттарын өйрәнеү һәм уларҙы үҙенең файҙаһына ҡулланыу өсөн бик күп көс һала. Антонийҙың тиҙ ғашиҡ булыусанлығын, дан һәм тышҡы ялтырауыҡтар яратыуын асыҡлап, Клеопатра уның эргәһенә ҡойроғона алтын ялатылған, аҡ елкәнле һәм көмөш ишкәкле суднола йөҙөп килә; батшабикә үҙе Афродитаның кейемендә була, уның ике яғынан эрос ҡиәфәтендәге малайҙар елпеүес елпеп тора, ә карапты нимфалар кейемендәге хеҙмәтселәр хеҙмәтләндерә. Карап Кидн йылғаһы буйлап флейта һәм кифар моңо аҫтында, төрлө тәмле еҫтәр таратып йөҙә. Һуңынан Клеопатра Антонийҙы үҙенең мул табынына саҡыра. Байлыҡ, муллыҡ яратыусы Антоний башын юғалта һәм артабанғы йылдарҙа инде ул Клеопатраға хеҙмәт итә.

Үҙенең асылы буйынса сәйәси көрәш - дәлилдәр түгел, ә ҡыҙыҡһыныуҙар һәм көстәр көрәше. Кешеләр асылы көсһөҙлөктө, ялағайланыуҙы ярата. Марк Порций Катон: "Әгәр кемдер һине маҡтаһа, уның дөрөҫмө икәнлеген тикшер", тип кәңәш иткән. Көсһөҙлөктө файҙаланыу - аҡылы етәксенең ҙур сәнғәте һәм дәрәжәһе күрһәткесе. Ул, ғәҙәттә, дошманының көсһөҙ яғын эҙләп таба һәм уға шантаж, ялағайланыу, аҡса, провокация һ.б. юлдар аша тәьҫир итеп, үҙе теләгән һөҙөмтәгә өлгәшә. Франция короле Генрих Наваррский: "Әгәр беҙҙе нимәләр өсөн маҡтауҙары шундай уҡ камиллыкты бирә алһа, маҡтауҙың баһаһы бик ҙур булыр ине", - тип ҡабатларға яратҡан. Мәғлүм булыуынса, оҫта ялағайҙар, ғәҙәттә, оҫта яласылар ҙа. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, һәр кешенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерер өсөн донъя шул тиклем ҙур, әммә кешенең ҡомһоҙлоғон ҡәнәғәтләндереү өсөн ул шул тиклем бәләкәй.

**Сергей СУВОРОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун дүртенсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл.** Барлыҡ ҡағиҙәләрҙе емерегеҙ!

Һәр секундын файҙалы итеп үткәргән һәм үҙенең хыялындағы тормош менән йәшәгән донъяның барлыҡ бөйөк кешеләренең бер дөйөм сифаты бар: улар тормоштан алырға мөмкин булған бер нәмәгә лә сикләү ҡуймай. Һеҙ ҙә кем булырға теләйһегеҙ, ниндәй сәләмәтлеккә эйә булырға уйлайһығыҙ, ниндәй ҡәнәғәтлеккә өлгәшергә ниәтләйһегеҙ - ошоларға ҡағылышлы барлыҡ ҡағиҙәләрҙе һәм шартлылыҡты ситкә алып ташларға тейешһегеҙ. Ни өсөн һеҙгә миллионер булмаҫҡа, ни өсөн Кариб диңгеҙе буйлап елкәнле суднола үтмәҫкә, Бали утрауына сәйәхәт ҡылмаҫҡа, роман-бестселлер яҙмаҫҡа, марафонда йүгермәҫкә йәки самолет менән идара итергә өйрәнмәҫкә? Бөгөн уҡ аң көйләнешен үҙгәртегеҙ. Һеҙҙең һәләттәрегеҙҙән түбәнерәк кимәлдәге, әммә һеҙ теләгән ҡаҙанышҡа өлгәшкән кешеләрҙе күҙәтегеҙ. Әгәр кемдер, үҙ эшегеҙҙе асыу өсөн ҡартһығыҙ, тиһә, ышанмағыҙ. Һеҙҙең кем була алыуығыҙҙы башына ла индермәгәндәргә үҙегеҙҙең кем икәнлегегеҙҙе раҫлағыҙ.

**Күнегеү: шәхси камиллыҡ тураһында хыял**

Ун позициянан торған хыялығыҙҙы яҙығыҙ. Барлыҡ фантазияғыҙҙы эшкә егегеҙ һәм юмор хисен дә онотмағыҙ. Хәҙер ошо пункттарҙың барыһы ла тормошҡа ашҡас, үҙегеҙҙең нимә кисерәсәгегеҙҙе күҙалларға тырышығыҙ. Һуңынан киләһе аҙнаға ниндәйҙер эште яҙығыҙ; уның ҙурмы, бәләкәйме икәнлеге мөһим түгел, хыялығыҙға табан алып барыуы мөһим. Әгәр хыялығыҙ елкән аҫтында Багама утрауҙарына табан йөҙҙөрә икән, иртәгә үк диңгеҙселәр курсына яҙылығыҙ - хыялығыҙға табан бер аҙым яһағыҙ! Әгәр хыялығыҙ шәхси эшҡыуарлыҡ икән - үҙегеҙгә кәрәкле семинарҙы эҙләп табығыҙ һәм иртәгә үк шунда барығыҙ.Әгәр һеҙ ысынлап та хыялығыҙҙың тормошҡа ашыуын теләһәгеҙ, ысынлап та шуға ынтылһағыҙ, бөгөн үк башлағыҙ, ә 10 йылдан һуң түгел.

**Икенсе бүлек: тән. Физик күнекмәләр - сираттағы кимәл**

"Тәүҙә үҙегеҙгә кем булырға теләүегеҙ хаҡында әйтегеҙ, һуңынан бының өсөн нимә кәрәк - шуны эшләгеҙ", - тип яҙған Эмерсон. Программаның беренсе көнөндә алдығыҙға физик әҙерлектең аныҡ маҡсаттарын ҡуйҙығыҙ. Хәҙер инде һеҙгә көн һайын 20 минут булһа ла физик күнегеүҙәр эшләү ғәҙәтегеҙ барлыҡҡа килергә тейеш. Көн тәртибен тотоу өсөн бөтөн нәмәне лә эшләгеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Тормош кәңәштәре**

а) Үҙегеҙ белгән энтузиастарҙың иң изгелеклеһе, көслөһө булығыҙ.

б) Йәштәр кеүек, ҡыуаныста йәшәгеҙ. Ихлас һәм йышыраҡ көлөгөҙ.

в) Иртәрәк ятығыҙ ҙа, иртәнге алты тулғанға тиклем торогоҙ.

г) Ихтыяждарығыҙҙы контролдә тотоғоҙ, ай һайын килемегеҙҙең 10 процентын туплап барығыҙ, мәрхәмәтлек фондтарына иғәнә индерегеҙ.

д) Хис-тойғоларығыҙға баш булығыҙ, бер ваҡытта ла асыуланмағыҙ.

е) Һыңғай, әүҙем һәм яратыусы кешеләр менән генә аралашығыҙ.

ж) Аҙыраҡ ашағыҙ, еңел аҙыҡтарға өҫтөнлөк бирегеҙ.

з) Нимә эшләһәгеҙ ҙә ғәҙел, намыҫлы, илтифатлы булығыҙ.

и) Айына бер көн йомшаҡ емештәр генә ашағыҙ.

к) Хыялығыҙға ынтылығыҙ, ҙур аныҡ маҡсаттар ҡуйығыҙ.

✓ *Эскән кешенең теле аҡса янсығынан да тиҙерәк сиселә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**40-сы һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Белешмә. 3. Батталова. 6. Зарипов. 11. Раунд. 12. Лафет. 13. Арҡар. 14. Емшән. 15. Даянова. 18. Патронташ. 21. Камалов. 26. Сфинкс. 28. Кенәгә. 29. Сар. 31. Хажиев. 33. Вәлиев. 34. Елена. 35. Ратмир (Бәҙретдинов). 36. Лукулл. 37. Бай. 39. Ошаҡсы. 42. Ростов. 45. Ҡаҙаныш. 47. Балаҡатай. 50. Стартер. 55. Тракт. 56. Динго. 57. Мужик. 58. Нанду. 59. Йыбытҡы. 60. Алтынбаева. 61. Роберт.

**Вертикаль буйынса:** 1. Бильярд. 2. Мирсаев. 4. Андорра. 5. Вәлиева. 7. Антенна. 8. Ваһапов. 9. Сусҡа. 10. Афиша. 16. Янки. 17. Омск. 19. Ребус. 20. Нәҫер. 22. Мәке. 23. Ләлә. 24. Исрафилов. 25. Мәҡсүтова. 27. Сихырсы. 28. Кавалер. 30. Арена. 32. Вер. 33. Вал. 37. Баҡта. 38. Йылға. 40. Ауыҙ. 41. Саян. 43. Олҡа. 44. Тест. 45. "Ҡарағай". 46. Ыҡтамаҡ. 48. Артикул. 49. Анданте. 51. Тротуар.52. Риүәйәт. 53. Баржа. 54. Инан.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Октябрь (Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәсту намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (9) дүшәмбе | 7:15 | 8:45 | 14:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 15 (10) шишәмбе | 7:17 | 8:47 | 14:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 16 (11) шаршамбы | 7:19 | 8:49 | 14:30 | 17:43 | 19:13 | 20:43 |
| 17 (12) кесе йома | 7:21 | 8:51 | 14:30 | 17:41 | 19:11 | 20:41 |
| 18 (13) йома | 7:23 | 8:53 | 14:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 19 (14) шәмбе | 7:25 | 8:55 | 14:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 20 (15) йәкшәмбе | 7:27 | 8:57 | 14:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



# ТЕАТР МИҘГЕЛДӘРЕ АСЫЛА

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 октябрь "Аҡ пароход"** (С.Айтматов), драма

**16 октябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н.Ғәйетбай), комедия

**17 октябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А.Кивиряхк), монодрама

**18 октябрь "Ер менән күк араһында"** (Т.Ғиниәтуллин. Р.Кинйәбаев инсц.), өндәге күрәҙәлек

**19 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

**20 октябрь "Мулла"** (Т.Миңнуллин), драматик хикәйә

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 октябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т.Миңнуллин), музыкаль комедия

**17 октябрь "Йәләлетдин атай"** (М.Кәрим), уйланыу

**19 октябрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г.Зәйнәшева), комедия

**20 октябрь "Тоҡ эсендәге бесәй, йәки Башкирская пленница"** (М.Кәрим), спектакль-концерт

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**17 октябрҙә "Ҡыҙыу миҙгел"** тип аталған 75-се ижад миҙгелен асыу концертына саҡыра. Концертта филармонияның эстрада йырсылары һәм коллективтары ҡатнаша.

* * *

Стәрлетамаҡ ҡалаһында Башҡорт дәүләт драма театры менән Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы бер һарайҙа **Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе** статусында эшләй башланы.

Әлеге ваҡытта XXIII ижад миҙгелен асыу тантанаһына ҙур әҙерлек бара. 17, 18 октябрҙә буласаҡ "Серле илһам ҡосағында сағыу йондоҙ булып ҡабынып..." тип аталған музыкаль-театрлаштырылған тамашала театр-концерт берләшмәһенең барлыҡ ижади көстәре ҡатнаша.

**23, 24 октябрҙә** тамашасылар Ибраһим Абдуллиндың әҫәре буйынса ҡуйылған **"Тиле йәшлек"** комедияһын тамаша ҡыласаҡ.

**31 октябрь** республикала ғына түгел, сит илдәрҙә танылған **бейеү театры концерты** буласаҡ.

* * *

Өфө "Нур" татар дәүләт театры бинаһында **Яр Саллы татар дәүләт драма театры** гастролдәре үтәсәк.

**22 октябрь "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия

**23 октябрь "Ғашиҡтар тауы"** (И.Юзеев), мелодрама

**24 октябрь "Йәш аралаш көлөү"** (Р. Батулла), мелодрама

**25 октябрь "Ҡыҙым кейәүгә сыға"** (Н.Птушкина), комедия

КИТАБЕННАС

# ЙӨҘ КӘЛИМӘ ФЕКЕРҘӘР...

## йәғни 2 минут та 24 секундта тыуған уйҙар

(Башы 11-се биттә).

### Күпме юғалтабыҙ...

Бер кәлимә фекерҙәрҙең ябай, ҡыҫҡа һәм аңлайышлы булыуҙары бик отошло. Берҙән, уларҙы уҡыр өсөн күп ваҡыт талап ителмәй, икенсенән, уларҙың тамамланған, шул уҡ ваҡытта артабанғы уйланыуҙар өсөн нигеҙ булырлыҡ фекер бөтөнлөгө зауыҡты ҡандыра, өсөнсөнән, уларҙы яҙыуы аңһат ҡына кеүек тойола. Әммә теге йәки был ваҡиға, мәғлүмәт юҫығына ҡарата уҡыусы көтмәгән яңы фекерҙе әйтер өсөн бик күп нәмә талап ителәләр тип уйланыла. Уларҙың тәүгеһе һәм иң мөһиме, әлбиттә, тормош тәжрибәһе, гөмүмән, анализлау, һиҙемләүемсә, математиктар эше. Сөнки бер шөп яңы фекер әйтер өсөн бер нисә фекерҙе, дәлилде, фактты, мәғлүмәтте сағыштырып, уларҙың уртаҡ знаменателен табыр өсөн фәҡәт тормош тәжрибәһе лазым. Тәжрибәгә юғары уҡыу йорттарында уҡытмайҙар, сығанаҡтар, китаптар аҡтарып та тәжрибә туплап булмай. Шуға күрә Гөлфиә Янбаева ошондай кәлимәләр яҙыр өсөн оҙайлы йылдар ваҡытлы матбуғатта хеҙмәт итергә, журналист мәктәбе үтергә тейеш булған. Ул мәктәпте кәлимәләр авторы "Башҡортостан" гәзите тип атай. Белеүебеҙсә, әгәр ҙә авторҙың ғүмер юлын ҡайҙа уҡыуына, эшләүенә ҡарап, миҙгелдәргә бүлеп сыҡһаҡ, уларҙың 22, йәғни иң күп өлөшө "Башҡортостан" гәзитенә тура килә.

Кәлимә фекерҙәрҙе яҙа белеү шарттарының икенсеһе, моғайын да, күп һанлы мәғлүмәт саралары аша таралған һуңғы яңылыҡтар, сәйәси ваҡиғалар менән даими танышып барыуҙыр. Ни өсөн тигәндә кәлимәләрҙәге фекер яңылығын тәьмин итер өсөн, йәғни кемдеңдер әйткән фекерен ҡабатламаҫ өсөн күпте белергә кәрәк шул. Әйткәндәй, был шарт та тәүгеһенә, йәғни тәжрибәгә барып ялғана.

"Елле фекерҙәр елгә осмаһын" китабы шундай һүҙҙәр менән асыла: "Ғалимдар әйтеүенсә, кешенең башынан көн дауамында алтмыш меңләп уй-фекер ялтлап уҙа. Беҙ уларҙың күпмеһен генә иҫләп, шәйләп, телебеҙгә йә күңелебеҙгә индерә һалып ҡалабыҙ икән? Бер тиҫтә, уҙа барһа, ике тиҫтәһен генәлер. Улары ла көнкүреш кимәлендәгеһенән үтмәйҙер. Күпме аҡыл юҡҡа сыға!"

Артабан китап авторы был фекерҙе шулай дауам итә һәм үҫтерә:"...Әгәр ҙә мейендә әйләнгән уй-фекерҙәрҙең һәр береһен яҙа барһаң... О-о, ул саҡта һин бөйөк яҙыусы, фәйләсүф, ғалим булыр инең. Тип бындай форсат бирелмәгән шул беҙгә. Бирелһә лә, беҙ уны файҙаланмайбыҙ. Беҙ теләһә кемдең теләһә ниндәй ахмаҡ һүҙен, зарын, ғәйбәтен тыңларға әҙербеҙ, әммә үҙ-үҙебеҙҙе, үҙебеҙҙең эске тауышты, шул уҡ мейебеҙҙәге уй-фекерҙәрҙе тыңларға өйрәнмәгәнбеҙ. Ә бит өйрәнергә ине ул. Һис юғы, бик ҡиммәт, бик үҙенсәлекле, йомғиятебеҙ, тормошобоҙ, йәш быуын өсөн ниндәйҙер файҙа бирерлек фекерҙәрҙе елгә осормайынса, ҡағыҙ битенә теркәп ҡуйырға ла, һуңынан уны башҡалар менән уртаҡлашырға өйрәнергә ине. Аҡыл менән уртаҡлашыу, тип атала был халыҡ теләндә. Ғәйбәт һөйләүгә йә тыңлауға ҡарағанда, ошондай ҡиммәтле фекерҙәр менән уртаҡлашыу күпкә файҙалыраҡ булыр ине..."

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әгәр ҙә кешенең мейеһенән тәүлегенә 60 меңләп уй-фекер уҙа икән, авторҙың йөҙ кәлимә фекере 24 сәғәттең ни бары 2 минут та 24 секундын ғына тәшкил итә. Ә ҡалған 23 сәғәт 57 минут 36 секундта тыуғандары ҡайҙа? Бер яҡтан ҡарағанда, был ябай ғына арифметика кеүек. Ә тотош ғүмерҙе, йылдарҙы, айҙарҙы иҫәпләй башлаһаҡ, ысынлап та, күпме уй-фекерҙәрҙе, кешелекте, милләтебеҙҙе камиллаштырыр идеяларҙы юғалтабыҙ икән. Гөлфиә Янбаеваның был китабы ошо хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итте.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ОҘОН КӨЙҘӘР ЯРЫШЫ

**"Оҙон көй" Төбәк-ара башҡорт йыры конкурсына ғаризалар ҡабул итеү башланды. Бәйге 7-8 ноябрҙә Туймазы ҡалаһында үтәсәк.**

Башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен башҡарыу - борон-борондан йырсы өсөн иң юғары оҫталыҡ иҫәпләнә. Бәйге халыҡ таланттарын асыҡлау, боронғо оҙон көй башҡарыу үҙенсәлектәрен тергеҙеү һәм һаҡлап ҡалыу, урындағы башҡорт йыр фольклорын тергеҙеү маҡсатында үткәрелә. Конкурсҡа башҡорт халыҡ йырҙарын йырлап белгәндәр барыһы ла ҡатнаша ала. Башҡарыусыларҙың махсус вокал белеме булмаҫҡа тейеш, йәш буйынса сикләүҙәр юҡ. Конкурсҡа махсус урта белем биреү учреждениелары вокал бүлегенең беренсе һәм икенсе курс студенттары ҡатнаша ала. Алдағы йылдарҙа ошо уҡ конкурста ҡатнашыусылар бәйгегә үткәрелмәй. Башҡа конкурстарҙа лауреат исеменә лайыҡ булыусылар дөйөм шарттар буйынса ҡатнаша. Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәренән дә йырсылар конкурста ҡатнаша ала.Башҡарыусылар өс төркөмгә бүленә:16 йәшкә тиклем; 16-нан 60 йәшкә тиклем; 60 йәштән олораҡ.

Бәйгесе конкурсҡа классик башҡорт халыҡ йыры, шулай уҡ үҙ төбәгендә сыҡҡан оҙон йырҙарҙы башҡарырға тейеш. Мотлаҡ белергә тейешле йырҙар исемлегенән йыр башҡарыу ҙа рөхсәт ителә. Конкурста ҡатнашыусы үҙенең оҙон йырҙарҙан торған репертуарын яҙма рәүештә күрһәтергә бурыслы, баһалама ағзалары ошо репертуарҙан йырҙарҙы башҡарыуын һорай ала. Йырлар алдынан йырҙың легендаһын, тарихын һөйләү мотлаҡ.

Конкурста ҡатнашырға теләүселәр 1 ноябргә тиклем ойоштороу комитетына ғариза бирергә һәм репертуарын яҙма килеш тапшырырға тейеш. Туймазы ҡалаһы, Октябрь майҙаны, 1, район хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге. Тел: 7-34-28, 7-24-51, Сәлихов Илдар Мәкәрим улы. Өфө ҡалаһы, 3. Бишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге. Тел: 289-65-50, факс: 8 (347) 289-62-00, 8960-398-02-94 - Әхмәтйәнова Эльвира Искәндәр ҡыҙы.

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ... ЯПОНИЯЛА

**Парижда ЮНЕСКО-ның Штаб-фатирында Башҡортостан Республикаһын презентациялау мәлендә Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамбле абруйлы бүләккә - "Биш ҡитға" алтын миҙалына һәм "Тыныслыҡ илсеһе" дипломына лайыҡ булды.**



Быға тиклем бындай бүләк билдәле Игорь Моисеев исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамблендә генә бар ине. Ғәскәровсыларға миҙалды һәм дипломды ЮНЕСКО-ның генераль секретары Ирина Бокова тапшырҙы. Парижда ансамбль "Гөлнәзирә", "Зарифа", шулай уҡ "Калинка" бейеүҙәрен башҡарған..

Әлеге мәлдә данлыҡлы ансамбль гастролдәр менән Японияға юлланды, улар унда Рәсәй мәҙәниәте фестивалендә ҡатнаша. Улар Мусатино, Токио, Мито, Сиба ҡалаларында сығыш яһаясаҡ. Ансамбль унда Башҡортостан ғына түгел, ә Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР АҪЫЛЫ - ҺИММӘТЛЕ,

## ҡыҙ аҫылы - ҡиммәтле

Эскән кешенең теле аҡса янсығынан да тиҙерәк сиселә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡыҙ-ҡатынды барлыҡҡа килтергәндә Хоҙай алты көн буйына баш ватҡан, алтынсы көндә лә эшен тамамлай алмай, һуңлап киткән.**

**-Ниңә Һин шул тиклем оҙаҡ ижад итәһең был ҡыҙ-ҡатын тигән затты? - тип аптырап һораған уның янында әйләнеүсе фәрештә.**

**-Ә һин был затҡа хас булған бар сифаттарҙы ла шәйләйһеңме һуң?- тигән Хоҙай. - Ул теләһә ниндәй аҙыҡты ла ашай, бер юлы бер нисә баланы ҡоса, үҙенең һүҙе һәм ҡулдары йылыһы менән һәр кемде һәр төрлө сирҙәрҙән дауалай алырға тейеш. Ауырыһа, ул үҙ-үҙен дә дауалаясаҡ, тәүлегенә 18 сәғәт эшләйәсәк. Был минең иң яратҡан ижад емешем буласаҡ...**

**Фәрештә ҡыҙ-ҡатын һыны янына килеп, уны тотҡолап ҡараған һәм:**

**-Һуң, был бит бик нескә зат буласаҡ!- тигән.**

**- Эйе, ул бик нескә зат, ләкин мин уны көслө иттем, - ти Хоҙай. - Һин уның ниндәй көртәләрҙе емерер көскә эйә икәнен күҙ алдына ла килтерә алмайһың...**

**- Ә ул уйлай беләсәкме һуң?- тип иплән кенә һорап ҡуя фәрештә.**

**- Уйлау түгел, ул башҡаларҙы ла инандыра һәм уртаҡ тел таба беләсәк, - ти Хоҙай һәм уның яңаҡтарынан һыпырып ҡуя.**

**- Аллам, был зат ирей түгелме?- тип һорай фәрештә ҡыҙ-ҡатын затының күҙҙәренән аҡҡан һыуҙы шәйләп.**

**-Юҡ, был уның күҙ йәштәре, - ти Алла.**

**- Ә күҙ йәштәре ни өсөн кәрәк?**

**- Күҙ йәштәре менән ул үҙенең ҡайғыһын да, икеләнеүҙәрен дә, һөйөүен дә, яңғыҙлығын, газап һәм шатлыҡтарын да белдерә...**

**Хоҙайҙың был һүҙҙәре фәрештәне хайран итә һәм ул үҙенең һоҡланыуын йәшермәйенсә, шундай һығымта яһай:**

**- Аллам, һин был ғәжәйеп заттың бар сифаттарын һынландырғанһың. Был затта ир затын аптырата торған оло көс бар. Ул бар бәләләрҙе еңә, ауырлыҡтарҙы күтәрә ала. Ул ир затына бәхет, мөхәббәт һәм аңлау илтә. Ҡыҫҡырғыһы килгәндә - көлә, илағыһы килгәндә - йырлай. Ул үҙе инанған нәмәләр өсөн көрәшә. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы сыға. Яҡшыраҡ һөҙөмтәләрҙе күрә белә һәм уның ҡарарҙарынан баш тартыуҙарҙы ҡабул итмәй. Ул үҙен ғаиләһе өсөн ҡорбан итә. Бала тыуыуына һәм туйҙарға шатлана. Яҡындары һәм дуҫтары донъя ҡуйғанда йөрәге ярылыр хәлгә килә. Ләкин ул һәр ваҡыт үҙендә йәшәүҙе дауам итер көс таба. Ул үбеү һәм ҡосаҡлау яралы йөрәкте дауалай икәнен белә. Уның бер генә етешһеҙлеге бар: ул үҙенең дәрәжәһе тураһында ғына онота..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3795